# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

2

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

2

КИТАП




Яландар, ҡырҙар хәҙергә
Бушап тын ҡалды.
Күбәләктәр яҙға саҡлы
Йоҡоға талды.
Көҙ килеп етте.
Сентябрь дуҫ, сумка тотоп,
Мәктәпкә китте.

*Гөлфиә Юнысова*



Тышта ҡар яуа,
Ниндәй саф һауа!
Әйҙә сығайыҡ,
Саңғы шыуайыҡ.
Ҡырға барайыҡ,
Юлдар ярайыҡ.
Биттәр ал булыр,
Яҡшы ял булыр!

*Ҡадир Даян*




## Март

Малайҙарҙың яҙ тигәне
Эй шаян булып сыҡты.
Ҡояш менән дуҫлашты ла,
Ҡыуҙы бынан һыуыҡты.
Ул иреткәс ҡар, боҙҙарҙы,
Гөрләүектәр аҡтылар.
«Март булғанда
ҡайтыу шарт!» — тип
Ҡоштар осоп ҡайттылар.

*Гөлфиә Юнысова*



Күлдәктәре гел сәсәктән,
Күҙҙәрҙе ҡамаштыра.
Ағастарында көн буйы
Ҡоштары һайрап тора.
Июнь ҡояшта ҡыҙына,
Һыу инергә ярата.
Баҡсаларҙа, ҡыуаҡтарҙа
Еләк-емеш үҫтерә.

*Гөлфиә Юнысова*

# 2 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

**Шартлы тамғалар — Условные обозначения**

**А** — тыңлап аңлау — аудирование

**Т** — төркөмдә эш — работа в группе

**П** — парлап эшләү — работа в паре

**1** — дәрес һаны — номер урока

— белемде киңәйтеү өсөн материал — материал для расширения кругозора

— актив һүҙлек — активная лексика

— пассив һүҙлек — пассивная лексика

**Башҡорт теле** : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем
Б28 биреү ойошмаларының 2-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. — 2-се баҫма / [Х. А. Толомбаев, М. С. Дәүләтшина, Ф. М. Ғиниәтуллина, Н. Н. Кинйәбаева]. — Өфө : Китап, 2017. — Һүрәттәре менән 148 бит.

ISBN 978-5-295-06802-7

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—2017**

**ISBN 978-5-295-06802-7**

© Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М. С., Ғиниәтуллина Ф. М., Кинйәбаева Н. Н., 2014
© Голубев Г. Е., һүрәттәр, 2014
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## 1 Һин кем?
## Ты кто?




**1.** Прочитай слоги и слова.

бә гә дә зә кә лә мә нә рә сә тә
әб әг әд әз әк әл әм ән әр әс әт

сәләм дәфтәр Әлиә Әмир Кәрим
әсәй мәктәп Әминә Әхәт Ләйлә

A **2.** Послушай разговор мальчика и девочки. Скажи, как их зовут.





— Сәләм! Мин Әмир. Ә һин кем?

— Сәләм! Мин Әлиә. Мин — уҡыусы.

**3.** Расскажи о мальчике.



Ул — Ваня.
Ваня — уҡыусы.

Т **4.** Познакомьтесь со своими соседями.

Т **5.** Познакомьте Лунтика со своими друзьями.



**мин** — я
**һин** — ты
**ул** — он (она)
**уҡыусы** — ученик
**сәләм** — привет

**әсәй** — мама
**дәфтәр** — тетрадь
**мәктәп** — школа

## 2 Һеҙ кем?
## Вы кто?

А Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ. Мин Ирина Ринатовна. Мин башҡорт теле уҡытыусыһы.




Беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Башҡортостанда рус һәм башҡорт телдәре — дәүләт телдәре.

**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| һа | һо | һу | һи | һә | һе | һы |

| | | |
|---|---|---|
| һыу | һаумы | Таһир |
| һут | һау бул | Заһир |

**2.** Запомни слова приветствия и прощания.





— Сәләм, Алина!
— Һау бул, Алина!

— Һаумы, Ильяс!
— Һау бул, Ильяс!

**Т** **3.** Прослушайте диалог и повторите.



— Һаумыһығыҙ, балалар!
— Һаумыһығыҙ! Ә һеҙ кем?
— Мин Алһыу Әмировна. Башҡорт теле уҡытыусыһы.

Это интересно

В Финляндии и Норвегии люди здороваются, прикасаясь друг к другу носами. На Тибете при встрече правой рукой снимают шапку, левую руку заводят за ухо и показывают язык. В Японии люди отдают поклон, а башкиры подают обе руки и слегка наклоняются.

**уҡытыусы** — учитель
**һаумы** — здравствуй
**һаумыһығыҙ** — здравствуйте
**һау бул** — до свидания
**һау булығыҙ** — до свидания

**балалар** — дети
**уҡыусылар** — ученики
**һыу** — вода
**һут** — сок

## 3 Һинең исемең кем (нисек)?
## Как тебя зовут?

А — Һаумы, Әминә!

— Сәләм, Айрат! Ә был кем?

— Был минең класташым. Уның иseме — Денис.

— Денис башҡортса аңлаймы?

— Эйе. Беҙ мәктәптә башҡорт телен өйрәнәбеҙ.



**1.** Прочитай слоги и слова.

ңа ңә ңе ңо ңы минең уның
аң әң ең оң ың һинең уҡытыусының

П **2.** Рассмотри рисунок и скажи, что делают мальчики.

— Һинең исемең нисек?
— Минең исемем — Азамат.
— Ә һинең исемең кем?
— Минең исемем — Әмир.



**3.** Вспомни слова со звуком **[ң]**.

Это интересно

В башкирском языке буква **ң** встречается только в середине и в конце слова, уң — правый, миңә — мне.

П **4.** Познакомьтесь с котёнком Маши.



— Был минең бесәйем. Уның ҡушаматы — Барсик.

Т **5.** Познакомьтесь с героями сказок.



**минең исемем** — моё имя
**һинең исемең** — твоё имя
**уның исеме** — его (её) имя

**төлкө** — лиса
**бесәй** — кот, кошка

## 4 Һинең исемең кем (нисек)?
## Как тебя зовут?




А Ике малай таныша:

— Һинең исемең кем?
— Марат.
— Минең дә исемем — Марат.
— О-о-о, һин дә Марат, мин дә Марат. Вәт ҡыҙыҡ!

П **1.** Познакомьтесь с героями мультфильма.



— Һинең исемең нисек?
— Минең исемем ... .
— Ә һинең исемең нисек?
— Минең исемем ... .
— Ә уның исеме кем?
— Уның исеме ... .

Т **2.** Игра «Знакомство». Встаньте в круг и по цепочке знакомьтесь друг с другом.

**3.** Внимательно прочитай слова и сравни.







| мин | миң | ун | уң |
|---|---|---|---|

**беҙҙең** — наш
**мин** — я
**ун** — десять

**миң** — родинка
**уң (ҡул)** — правая (рука)
**ҡыҙыҡ** — интересно, смешно

## 5 Һин ҡайҙа йәшәйһең?
## Где ты живёшь?




А Һаумыһығыҙ. Танышайыҡ. Минең исемем — Айҙар. Мин икенсе класта уҡыйым. Математика, башҡорт теле, физкультура дәрестәрен яратам. Дәрестән һуң велосипедта йөрөйөм, малайҙар менән футбол уйнайбыҙ.

**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| аҙ | оҙ | уҙ | ыҙ | иҙ | әҙ |
| эҙ(еҙ) | таҙа | беҙ | ҙа | ҙо | ҙу |
| ҙы | ҙи | ҙә | ҙе | яҙа | ҙур |

П **2.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Сәләм! Мин Айҙар. Ә һин кем?
— Мин Әминә. Һин ҡайҙа йәшәйһең?
— Мин Сибайҙа йәшәйем. Ә һин?
— ...

Т **3.** Скажите, кто где живёт.




Өлгө: Мин Рәсәйҙә йәшәйем.
Айҙар ауылда йәшәй.

**ауылда** — в деревне
**ҡалала** — в городе
**яҙа** — пишет
**йәшәйем** — живу

**икенсе** — второй (-ая, -ое)
**ҙур** — большой (-ая, -ое)
**уҡыйым** — учусь
**таҙа** — чистый (-ая, -ое)
**беҙ** — мы

## 6 Һин ҡайҙа йәшәйһең? Где ты живёшь?




А Һаумыһығыҙ. Минең исемем — Хәйҙәр. Мин икенсе класта уҡыйым. Мин Өфөлә Салауат Юлаев урамында йәшәйем. Өфө — Башҡортостандың баш ҡалаһы. Мин Өфөнө бик яратам.

П **1.** Узнайте, где живут герои сказок.

Һин ҡайҙа йәшәйһең?






| | | | |
|---|---|---|---|
| һыуҙа | урманда | Айҙа | ерҙә |

Өлгө: — Крокодил Гена, һин ҡайҙа йәшәйһең?
— Мин һыуҙа йәшәйем.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: һуҡыр сысҡан, Лунтик, терпе.

**Т** **2.** Составьте предложения из данных слов. Оцените свою работу после коллективной проверки.

| | | |
|---|---|---|
| мин | Салауатта<br>ауылда<br>Борайҙа<br>Йылайырҙа<br>Сибайҙа<br>Ишембайҙа<br>Шишмәлә | йәшәйем<br>йәшәмәйем |

Өлгө: Мин Салауатта йәшәйем. Мин ауылда йәшәмәйем.

**йәшәмәйем** — не живу
**урамында** — на улице
**йортта** — в доме
**фатирҙа** — в квартире

**һыуҙа** — в воде
**Айҙа** — на Луне
**урманда** — в лесу
**ерҙә** — на земле

## 7 Һиңә нисә йәш?
## Сколько тебе лет?

**А** Һаумыһығыҙ. Минең исемем — Тортила. Мин һыуҙа ла, ерҙә лә йәшәйем. Ә дуҫым Буратино тик ерҙә генә йәшәй. Беҙ бик дуҫ.



Назови автора и название этого произведения.

**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| бү | гү | кү | нү | сү | тү | рү | дүрт |
| үб | үг | үк | үн | үс | үт | үр | түгел |

**2.** Научись отвечать на вопрос «һиңә нисә йәш?» («Сколько тебе лет?»).

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| миңә | 5<br>биш | 6<br>алты | 7<br>ете | йәш |
| | 8<br>һигеҙ | 9<br>туғыҙ | 10<br>ун | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| миңә | 1<br>бер | 2<br>ике | 3<br>өс | 4<br>дүрт | йәш түгел |

Өлгө: Миңә ете йәш. Миңә дүрт йәш түгел.

П **3.** Прочитайте диалог и продолжите.

— Сәләм! Минең исемем — Илүс. Ә һин кем?
— Сәләм! Мин Фәнүз. Һиңә нисә йәш?
— Миңә ете йәш. Ә һиңә?
— Миңә лә ете йәш.
— Ә һин ҡайҙа йәшәйһең?
— ...

**түгел** — не (частица)

**дуҫ** — друг
**дуҫтар** — друзья

Это интересно

В зоопарке Индии жила самая старая черепаха. Ей было 226 лет, вес составлял 250 кг.

## 8 Тән өләштәре
## Части тела




А Сәләм! Минең исемем — Гүзәл. Мин Асҡын районы Ҡашҡа ауылында йәшәйем. Миңә һигеҙ йәш. Мин икенсе класта уҡыйым. Минең дуҫым Илүзә Өфөлә Мостай Кәрим урамында йәшәй. Уға ун йәш, ул дүртенсе класта уҡый. Беҙ бик дуҫ.

**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| ҡа | ҡи | ҡо | ҡу | ҡы | уҡыусы | уҡый |
| аҡ | иҡ | оҡ | уҡ | ыҡ | уҡытыусы | уҡыта |

**2.** Познакомься с новыми словами.



**3.** Игра. Кто больше назовёт слов со звуком **[ҡ]**.

**Т** **4.** Измените слова по образцу. Обсудите в группе выполненную работу и оцените друг друга.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| минең | сәсе**м** | баш.. | ҡул.. | исем.. |
| һинең | сәсе**ң** | баш.. | ҡул.. | исем.. |
| уның | сәсе | баш.. | ҡул.. | исем.. |

**уҡый** — учится, читает
**уҡыта** — учит

**тик, генә** — только

## 9 Тән өлөштәре
## Части тела

**А** Бер, ике — был баш,
Өс, дүрт — былар ҡаш,
Биш, алты — ҡулдар,
Ете, һигеҙ — күҙҙәр,
Туғыҙ, ун — аяҡтар,
Танау, ауыҙ, ҡолаҡтар.




**1.** Познакомься с новыми словами.

күҙ
керпек
бит
тел
теш
ауыҙ
ирен



**2.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть. Расскажи в классе.

### Был мин

Бына танауым,
Был минең ҡашым,
Күҙем, ҡолағым,
Ә бына башым.

Ауыҙҙы асһам,
Телем күренә.
Теҙелгән тешем
Өс бөртөк кенә.

Ҡулды күтәрҙем —
Аяҡ тыпырлай,
Үҙенән-үҙе
Бейергә һорай.

(Рәсимә Ураҡсина)

**3.** Запомни советы врачей.

Иртән һәм кисен тешеңде таҙарт! (Утром и вечером чисти зубы!)

Ҡулыңды һабын менән йыу! (Руки мой с мылом!)

**4.** Сравни и объясни значение.

күҙ һалыу — глаз положить
тел сарлау — лясы точить

## 10 Ауырта/ауыртмай
## Болит/не болит

**А** Отгадай загадку.

Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Ауыҙы юҡ, теле юҡ.
Ә үҙенең өйрәтмәгән,
Һөйләмәгән һүҙе юҡ.




**1.** Составь предложения из данных слов.

| | | |
|---|---|---|
| минең | теш**ем**<br>эс**ем**<br>баш**ым**<br>ҡул**ым** | ауырта<br>ауыртмай |

Өлгө: Минең ҡулым ауырта.
Минең башым ауыртмай.

**Т** **2.** Составьте предложения и запишите. Работайте внимательно.

| | | |
|---|---|---|
| һинең<br>уның | теш..(-ең; -е)<br>күҙ..(-ең; -е)<br>баш..(-ың; -ы)<br>эс..(-ең; -е)<br>ҡул..(-ың; -ы) | ауырта<br>ауыртмай |

П **3.** Прочитайте диалог и составьте по образцу новый.

— Һаумыһығыҙ, Кәримә Камилевна.
— Һаумы, Костя.
— Минең башым ауырта.
— Нимә булды?
— Йығылдым.
— Бына һиңә дарыу. Һаҡ йөрө.



**4.** Спиши, вставляя пропущенные буквы **(ҡ — к)**. Проверь себя по словарю.

у..ытыусы, ..ола.., ..аш, ..ул, ..ерпе.., ая.., барма.., ар..а, у..ыусы

**ауырта** — болит
**ауыртмай** — не болит

**нимә булды?** — что случилось?
**йығылдым** — упал
**дарыу** — лекарство
**һаҡ йөрө** — ходи осторожно

**5.** Составь из букв слова.

т л е, ҙ у ы а, т б и, ҡ а я, а а ҡ р

## 11 Минең, һинең, уның
## Мой (моя), твой (твоя), его (её)

**А** Ғаяз уҡытыусыға:

— Ғәлиә Әмировна, минең эсем ауырта. Мин контроль диктант яҙмайым әле.

— Ә бөгөн контроль диктант булмай бит.

— Ура-а-а, минең эсем дә ауыртмай!



**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| ға | ғә | ғо | ғө | ғү | ғи | ғы |
| ағ | әғ | оғ | өғ | үғ | иғ | ығ |

туған — ғаилә — һаумыһығыҙ

ғәфү ит — ағай — һау булығыҙ

**2.** Составь имена мальчиков. Какие имена встречаются чаще?

Ға → та, яз, риф

Ғә → лим, зим, фүр

**3.** Познакомься с новыми словами.




**4.** Прочитай текст и переведи.

Был минең әсәйем. Уның исеме — Ғәлиә Булатовна. Әсәйем врач булып эшләй. Уға 35 йәш. Мин уны яратам.

Расскажи о своей маме.

**5.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть. Расскажи его родным.

## Матур менән көслө

Бер кем дә юҡтыр
Әсәйем ише —
Ул донъялағы
Иң матур кеше.

Бер кем дә юҡтыр
Атайым төҫлө —
Ул бик тә батыр,
Ул бик тә көслө.

(Фәүзиә Рәхимғолова)

**6.** Прочитай. Запомни совет!

Карлсон:
— Минең тешем ауырта!
Врач:
— Тешеңде таҙарт!

**ғаилә** — семья
**ғәфү ит** — извини
**эшләй** — работает
**врач булып** — врачом

**туған** — родственник
**утыҙ биш** — тридцать пять
**юҡтыр** — нет, наверное
**иш** — пара
**батыр** — смелый (-ая, -ое)
**көслө** — сильный (-ая, -ое)

## 12 Бармы? Есть ли?

**А** Минең апайым менән ҡустым бар. Апайымдың исеме — Гүзәл. Ул бишенсе класта уҡый. Ҡустымдың исеме — Ғаяз. Ул балалар баҡсаһына йөрөй. Беҙ бик татыубыҙ.




**1.** Составь предложения из данных слов.

| | | |
|---|---|---|
| минең<br>һинең | ағай..<br>апай..<br>һеңле..<br>ҡусты.. | бар<br>юҡ |

Өлгө: Минең апайым бар. Һинең апайың юҡ.

**П** **2.** Прочитайте диалог и составьте свой.

— Галя, һинең ағайың бармы?
— Эйе, бар.
— Уның исеме нисек?
— Гриша.
— Ул уҡыймы?
— Юҡ, ул полицейский булып эшләй.

**3.** Допиши окончания слов. Если трудно, то загляни в справочник.

Миңә һигеҙ йәш. Мин мәктәптә уҡый.. . Мин.. һеңлем бар. Ул бәләкәй. Атай.. заводта эшләй. Әсәй.. театрҙа эшләй.

**4.** Научись отличать эти слова.

ултыр → **ғыс**



ултыр → **ығыҙ**



**5.** Прочитай стихотворение о маме. Чётко выговаривай каждый звук.

## Әсәйем

Әсәйең кем тиһегеҙме?
Белмәйһегеҙме шуны ла,
«Алтын ҡуллы апай», тиеп
Йөрөтәләр уны ла.

(Файыҡ Мөхәмәтйәнов)

**бармы?** — есть ли?
**бар** — есть
**юҡ** — нет
**эйе** — да

**балалар баҡсаһы** — детский сад
**бәләкәй** — маленький (-ая, -ое)
**алтын ҡул** — золотые руки

### Это интересно

Согласно Книге рекордов Гиннесса, самая многодетная семья жила в России в XVIII веке. У них было 69 детей.

# 13 Нимә эшләй?
## Что делает?



А Был минең әсәйем. Уның исеме — Ғәлимә Наилевна. Әсәйем поликлиникала эшләй. Ул балалар врачы. Балалар уны ярата.

Был минең атайым. Уның исеме — Ғәлинур Юлаевич. Ул заводта эшләй. Мин атайым менән әсәйемде бик яратам.

**1.** Прочитай слоги и слова. Не забывай про ударения в словах.

бө гө ҙө зө йө көлө мө нө рө сө фө
өб өг өҙ өз өй өк өл өм өн өр өс өф

Бөрө  Нөгөш  Өфө  Өршәк

**2.** Составь имена девочек. Посмотри в словаре перевод слова «гөл». Как ты думаешь, что обозначают эти имена?

Гөл → дәр, сөм, гөнә

Гөл → сәсәк, наз, шат



П **3.** Прочитайте диалог. Разыграйте разные ситуации.

— Сәләм, Гөлсөм. Был кем?
— Сәләм, Олег. Был минең олатайым.
— Уның исеме нисек?
— Өлфәт.
— Олатайың нимә эшләй ул?
— Ул машина йүнәтә.

**4.** Познакомься с новыми словами.




**5.** Принеси фотографию своей семьи. Подготовь рассказ о членах своей семьи.

**6.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть.

## Бәхетле

Өләсәйем бәхетле,
Олатайым бәхетле,
Атай менән әсәй ҙә,
Мин үҙем дә бәхетле.

(Фәүзиә Рәхимғолова)

**олатай, ҡартатай** — дедушка
**өләсәй, ҡартәсәй** — бабушка

**бәхетле** — счастливый (-ая, -ое)
**Өфө** — Уфа
**йүнәтә** — ремонтирует

## 14 Нимә эшләй? Что делает?



А Был бармаҡ — олатай,
Был бармаҡ — өләсәй,
Был бармаҡ — атай,
Был бармаҡ — әсәй,
Был бармаҡ — мин.



**1.** Внимательно прочитай рассказ Айрата о своей семье и постарайся запомнить.

Минең атайым һәм әсәйем бар. Мин уларҙың улы. Минең апайым — уларҙың ҡыҙы. Олатайым — әсәйемдең атаһы. Өләсәйем — әсәйемдең әсәһе. Ҡартатайым — атайымдың атаһы. Ҡартәсәйем — атайымдың әсәһе. Мин уларҙың ейәне. Апайым — уларҙың ейәнсәре.

**2.** Расскажи о своей семье.

**3.** Познакомься с новыми словами. Составь с ними предложения.

**Нимә эшләй?**




һөйләй



төҙөй



һүрәт төшөрә



урамда йөрөй

Өлгө: Әлиә һүрәт төшөрә.

Т **4.** Прочитай стихотворение. Обсудите содержание в группе.

## Апайым — доктор

Һеҙ әле белмәйһегеҙҙер,
Апайым минең — доктор.
Уның кеүек дауалаусы
Яҡын-тирәлә юҡтыр.

Сирлеләргә дарыу бирә,
Бәйләй ул яраларҙы.
Укол ҡаҙап төҙәтә ул
Сирләгән балаларҙы.

(Әлфинур Вахитова)

П **5.** Заполните кроссворд и прочтите полученное слово.

1. Ғаиләлә минән оло ҡыҙ. 2. Ғаиләлә минән бәләкәй малай. 3. Әсәйемдең атаһы. 4. Ғаиләлә минән ҙурыраҡ малай.




**6.** Составь из букв слова. Оцени свою работу после проверки.

О А Т А
Л Й О

Ә Л Ә
Ө Б
С Е Й

**ейән** — внук
**ейәнсәр** — внучка
**һөйләй** — рассказывает
**һүрәт төшөрә** — рисует

**төҙөй** — строит
**урамда йөрөй** — гуляет на улице

## Мин нимә яратам? Что я люблю?

### 15 Нимә менән? С чем?



**А** Минең исемем — Илүзә, фамилиям — Кәримова. Мин икенсе класта уҡыйым. Минең атайым, әсәйем, олатайым, өләсәйем, апайым бар. Атайым мәктәптә уҡытыусы булып эшләй. Әсәйем банкта эшләй. Олатайым менән өләсәйем — пенсионерҙар. Апайым — студент. Ул университетта уҡый. Беҙ татыу йәшәйбеҙ.

**1.** Прочитай слоги и слова.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ҫа | ҫо | ҫы | аҫ | оҫ | ыҫ | иҫ | дөрөҫ |
| ҫә | ҫө | ҫе | әҫ | өҫ | еҫ | эҫ | дөрөҫ түгел |

**2.** Познакомься с новыми словами. Придумай с ними словосочетания.

| | | | |
|---|---|---|---|
|  икмәк |  ҡоймаҡ |  бәлеш |  бутҡа |
|  һөт |  сәй |  бал |  аш |

Өлгө: тәмле ҡоймаҡ.

**П** **3.** Прочитайте текст и постарайтесь понять содержание. Обсудите содержание текста с соседом.

Мин иртәнге аш ашайым. Колбаса, сыр менән икмәк ашайым, бал менән сәй эсәм. Бал бик тәмле. Әә һеңлем ҡоймаҡ менән сәй эсә. Ул ҡоймаҡ ярата. Ҡоймаҡты өләсәйем бешерҙе.

**4.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть. Расскажи родителям.

## Икмәк

Икмәкте кем дә ярата:
Минең әсәй,
Атай ҙа,
Ағайым да,
Апайым да,
Өләсәй ҙә,
Олатай ҙа.
Тәмләп-тәмләп
ашай уны
Һеңлем дә,
Энекәш тә,
Дуҫтарым да.

(Сафуан Әлибай)



**5.** Если соединишь разорванные части слов, то узнаешь, что из еды понравилось инопланетянину на Земле. Прочитай эти слова.



ик бә
ҡой мәк
бут маҡ
ҡа леш

**иртәнге аш** — завтрак
**ашайым** — ем, кушаю
**эсәм** — пью
**менән** — с (предлог)

**татыу** — дружно
**тәмле** — вкусно
**бешерҙе** — приготовила

## 16 Нимә менән?
## С чем?

А Беҙ төшкө аш ашайбыҙ. Әсәйем тәмле аш бешерҙе. Мин ашты ҡорот менән ашайым. Ҡорот менән аш бик тәмле. Ҡоротто өләсәйем эшләй.

**1.** Познакомься с новыми словами.

| | | |
|---|---|---|
|  ит |  картуф |  балыҡ |
|  туңдырма |  май |  һут |

**2.** Спиши предложения, запомни их.

Ашығыҙ тәмле булһын! (Приятного аппетита!)

Өҫтәлегеҙ гел тулы булһын! (Пусть ваш стол всегда будет полон!)

п **3.** Составьте меню для сказочных героев. Оцените свою работу.



**4.** Познакомься с башкирскими блюдами.

**ҡатыҡ, ҡорот, ҡымыҙ, сәксәк, эремсек**

Какие из этих продуктов есть на прилавках магазинов? Какие из них ты пробовал?

**5.** Слова «рассы́пались». Помоги собрать.

**ймоаҡк, шәлеб, кәмки, ҡабту, амрдыңту, тркфау**

Подсказка: блины, мороженое, хлеб, пирог, каша, картофель.

Т **6.** Знаете считалки? Познакомьтесь со считалкой на башкирском языке. На перемене поиграйте с друзьями.

Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун.
Ундан — уймаҡ,
Табала — ҡоймаҡ,
Мейестә — бәлеш,
Сыҡ та йәбеш!

**төшкө аш** — обед

**ҡорот** — курут
**ҡымыҙ** — кумыс
**сәксәк** — чак-чак
**эремсек** — творог

## 17 Нимә менән?
## Чем?

**А** Бөгөн минең тыуған көнөм. Беҙгә олатайым менән өләсәйем, ҡартатайым менән ҡартәсәйем килделәр. Әсәйем ҡоймаҡ, бәлеш бешерҙе. Атайым тәмле торт-туңдырма, кәнфит, һут һатып алды. Тыуған көн бик күңелле үтте.

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай с ними словосочетания.

| | | |
|---|---|---|
| <br>бысаҡ | <br>сәнске | <br>ҡалаҡ |
| <br>сынаяҡ | <br>таба | <br>балғалаҡ |

Өлгө: үткер бысаҡ.

Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр: үткер — острый, тимер — железный, таҙа — чистый, эҫе — горячий, еңел — лёгкий.

**2.** Внимательно рассмотри таблицу и постарайся запомнить. Это поможет тебе правильно понимать текст и разговаривать.

| | | |
|---|---|---|
| **нимә менән?**<br>**чем?** | бысаҡ менән<br>ҡалаҡ менән<br>сәнске менән | ножом<br>ложкой<br>вилкой |
| **нимә менән?**<br>**с чем?** | бал менән<br>май менән<br>кәнфит менән | с мёдом<br>с маслом<br>с конфетами |

**3.** Прочитай предложения, переведи на русский язык. Ты разглядел разницу в переводе?

Атай **бысаҡ менән** икмәк телә.
Урал **ҡорот менән** аш ашай.
Алина **кәнфит менән** сәй эсә.

**4.** Прочитай. Понравившееся стихотворение выучи наизусть.

## Сәй эсеү

Әсәй, өләсәй, ейәнсәр
Өсәүләп сәй эсәләр.
Сәйнүк сәйен эсеп бөткәс,
Самауырға күсәләр.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

Өҫтәл артында Айбулат
Ашап ултыра бутҡа.
Сынаяҡты йә ҡалаҡты
Һәр саҡ яңылыш тота.

(Факиһа Туғыҙбаева)

**5.** Поищите названия посуды. Кто больше найдёт, тот молодец!





| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| т | а | б | а | л | р |
| к | ә | с | т | р | ү |
| к | с | а | м | а | л |
| и | т | ә | р | и | л |
| л | ә | к | б | и | к |
| б | ы | с | а | ҡ | ә |
| б | л | а | у | р | ә |
| у | ҡ | а | л | а | ҡ |
| б | о | к | а | л | ҡ |





**килделәр** — пришли
**тыуған көн** — день рождения
**һатып алды** — купил
**күңелле** — весело
**телә** — режет

# 18 Ҡабатлау
## Повторение

**А** Был беҙҙең ғаилә. Бөгөн ял көнө. Олатайым менән ҡустым әкиәт уҡыйҙар. Әсәйем менән апайым торт бешерәләр. Өләсәйем менән һеңлем паркта. Мин атайым менән компьютерҙа уйнайым.

**Т** Составьте предложения по картине. Обсудите свои предложения в группе.



**ярҙам итә** — помогает
**уйнай** — играет
**йоҡлай** — спит

**ҡурай** — курай
**карауат** — кровать

# Минең мәктәбем — Моя школа

## 19 Мәктәп ниндәй?
## Школа какая?

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай с ними словосочетания.



**ҙур** мәктәп





**бәләкәй** мәктәп






**яңы**



**иҫке**



**матур**



**насар**

А **2.** Прослушай текст. Расскажи о своей школе.

Был беҙҙең мәктәп. Ул яңы, матур. Мәктәптә математика, башҡорт теле, рус теле, инглиз теле, биология, география кабинеттары бар. Кабинеттар ҙур, матур.

**3.** Игра «Снежный ком». Постарайся как можно быстрее прочитать эту лесенку.

Мәктәп.
Был мәктәп.
Был беҙҙең мәктәп.
Был беҙҙең яңы мәктәп.
Был беҙҙең яңы, ҙур мәктәп.
Был беҙҙең яңы, ҙур, матур мәктәп.

Построй свою лесенку и прочитай соседу.

п **4.** Прочитайте диалог и составьте новый.

— Сәләм. Һинең исемең нисек?
— Сәләм. Минең исемем — Артур. Ә һинең?
— Минең исемем — Тимур. Һин нисәнсе мәктәптә уҡыйһың?
— Икенселә.
— Ә был беҙҙең мәктәп. Ул ҙур, яңы, матур.
— Беҙҙең мәктәп тә яңы. Унда бассейн бар.
— О, шәп икән! Минең дә һеҙҙең мәктәптә уҡығым килә.

**5.** Прочитай стихотворение и приготовь ответы на вопросы.



### Уңған ҡыҙ

Гөлшат бөгөн иртә торҙо,
Ҡулын, битен, тешен йыуҙы.
Сәсен үреп, таҫма таҡты,
Гөлдәргә һыу һибеп ҡуйҙы.

Урынын да йыйыштырҙы,
Үҙе бөгөн шундай шат.
Ана, ниндәй етеҙ баҫып,
Мәктәпкә бара Гөлшат.

(И. Ғүмәрова)

1. О ком идёт речь в стихотворении?
2. Что сделала Гульшат с утра?
3. Почему у неё весёлое настроение?

**6.** В предложениях есть ошибки. Внимательно прочитай и выпиши правильные предложения. Не забудь сверяться с текстом из упражнения 5.

1) Гөлшат бөгөн һуң торҙо.
2) Гөлдәргә һыу һибеп ҡуйҙы.
3) Сәсен һүтеп, таҫма таҡты.
4) Мәктәпкә бара Гөлшат.

**мәктәп** — школа
**матур** — красивый (-ая, -ое)
**ҙур** — большой (-ая, -ое)
**яңы** — новый (-ая, -ое)
**күп** — много

**иҫке** — старый (-ая, -ое)
**насар** — плохой (-ая, -ое)
**ниндәй?** — какой?

## 20 Класс ниндәй?
## Класс какой?

**А** Был беҙҙең мәктәп. Ул ҙур, өс ҡатлы. Беҙҙең мәктәп матур. Бөтә кабинеттарҙа ла сәскәләр үҫә. Мәктәптә ҙур спортзал, ашхана, төрлө кабинеттар бар. Унда дуҫтарым күп, күңелле.

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай словосочетания.

| | | |
|---|---|---|
|   такта |  аҡбур |  өҫтәл |
|  ишек |  тәҙрә |  иҙән |

**П** **2.** Прочитайте диалог и продолжите его.

— Беҙҙең мәктәп ҙур, яңы.
— Ә беҙҙең мәктәп иҫке.
— Беҙҙең класта компьютер бар.
— Ә беҙҙең класта интерактив таҡта бар.
— ...

**3.** Нарисуй свой класс и подпиши каждый предмет. Оцени свою работу.

**4.** Спиши предложения, вставляя пропущенные слова.

Был беҙҙең … . Ул …, … . Стенала … . Класта 1 …, 10 …, 20 …, 3 … бар.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** матур, таҡта, класс, ҙур, ултырғыс, өҫтәл, парта, тәҙрә.

**5.** На уроке ты слышишь из уст учителя башкирскую речь. Чтобы успешно работать, ты должен хорошо понимать сказанное. Вот некоторые фразы. Запомни их!

| | |
|---|---|
| Таҡтаға сыҡ!<br>Дәрес башланды (бөттө).<br><br>Инергә мөмкинме (яраймы)?<br>Сығырға яраймы? | Выйди к доске!<br>Урок начался (закончился).<br>Можно войти?<br>Можно выйти? |

**6.** Отгадай загадку.

Дүрт апайға бер яулыҡ.



**ашхана** — столовая

**өс ҡатлы** — трёхэтажный

## Мин мәктәпкә йыйынам — Я собираюсь в школу

### 21 Кемдеке? Чей? Чья? Чьё?

**А** Был беҙҙең класс. Ул шундай яҡты, матур. Минең партам тәҙрә эргәһендә. Тәҙрәнән беҙҙең йорт күренеп тора. Тәҙрә төбөндәге гөлдө әсәйем бүләк итте. Беҙҙең класта интерактив таҡта ла бар. Уның менән эшләүе ҡыҙыҡ. Уҡытыусының өҫтәлендә компьютер тора. Беҙ дәрестә башҡортса мультфильмдар ҙа ҡарайбыҙ.

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай словосочетания и предложения.

| | | |
|---|---|---|
|  дәреслек |  дәфтәр |  ҡәләм |
|  юйғыс |  пенал |  карта |

**2.** Прочитай и скажи, чья это вещь.





китап минеке  пенал һинеке  альбом уныҡы

**П** **3.** Внимательно прослушайте диалог. Обменяйтесь вещами и поговорите друг с другом.

— Был һинең ручкамы?
— Юҡ, был ручка минеке түгел.
— Кемдеке?
— Сашаныҡы.

**4.** Головоломка. Если ты правильно составишь предложение, то прочитаешь о пользе книги.



Подсказка: шишмәһе, белем, китап.

**5.** На уроке ты слышишь из уст учителя башкирскую речь. Чтобы успешно работать, ты должен хорошо понимать сказанное. Вот некоторые фразы. Запомни их!

| | |
|---|---|
| Китапты асығыҙ. | Откройте книгу. |
| Китапты ябығыҙ. | Закройте книгу. |
| Дәфтәргә яҙабыҙ. | Пишем в тетради. |
| Дәреслектән уҡы. | Читай по учебнику. |
| Таҡтаны һөртөгөҙ. | Вытирайте доску. |
| Күнегеүҙе табығыҙ. | Найдите упражнение. |
| Өй эшен яҙығыҙ. | Запишите домашнее задание. |
| Дәрес тамам. | Урок окончен. |

### Это интересно

1000 лет назад в Аравии дети учились, сидя на верблюдах. Плохих учеников наказывали плетьми. А хороших учеников на верблюде возили по городу, и все жители угощали их сладостями.

Слово «школа» пришло в русский язык из Древней Греции и означало не «учебное заведение», а «досуг», «отдых».

## 22 Нисек?
## Как?

А Мин мәктәпкә йыйынам. Әсәйем:

— Улым, китап-дәфтәреңде алдыңмы?

— Эйе.

— Ҡәләм-ручкаңды алдыңмы?

— Эйе.

— Көндәлегеңде алдыңмы?

— Юҡ. Ул ҡайҙа икән? Ә-ә-ә, уҡытыусы өҫтәлендә ҡалды бит...

— Ә дәресеңде нисек эшләнең?

— ...

Ответь на вопросы.

1. Как мальчик выполнил домашние задания без дневника?
2. Как ты думаешь, почему мальчик забыл дневник?

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай предложения.



матур яҙа



ҡысҡырып һөйләй



яҡшы уҡый



дөрөҫ ултыра

**П** **2.** Прочитайте диалог и попробуйте изменить его по-своему.

— Һин яҡшы уҡыйһыңмы?
— Эйе. «4», «5» кенә алам. Ә һин?
— Мин насар уҡыйым шул.
— Ни эшләп?
— Әллә. Уҡытыусы «2» йә «3» ҡуя бит.
— Ә һин тырышып уҡы.

**3.** Заполни кроссворд.



**4.** Отгадай загадки.

1) Ҡәләме юҡ, ҡулы юҡ,
Тәҙрәгә һүрәт төшөрә.

(һыуыҡ)

2) «Алфавит»та нисә хәреф бар?

(ете)

3) «Дәрес» башында беҙ нимә ишетәбеҙ?

(Д хәрефен)

4) Яҙып ҡарағыҙ әле һеҙ
Һан менән «300 техник».
Төҙөгөҙ яңы бер һүҙ,
Ниндәй һүҙ ул?

(зоотехник)

5) Яҙып ҡарағыҙ әле һеҙ
Һан менән «300 парк».
Төҙөгөҙ яңы бер һүҙ,
Ниндәй һүҙ ул?

(зоопарк)

**яҙа** — пишет
**яҡшы** — хорошо
**ҡысҡырып** — громко
**һөйләй** — рассказывает
**дөрөҫ** — правильно

**ни эшләп?** — почему?
**әллә** — не знаю
**фән** — наука, предмет
**билдә** — оценка

## 23 Ҡайҙа? Где?

А Минең яҡшы дуҫым бар. Уның исеме — Тимур. Ул авиамоделистар түңәрәгенә йөрөй. Тимур төрлө самолёт моделдәрен оҫта төҙөй. Дуҫымдың өйөндә самолёттар коллекцияһы бар.

Ә һеҙҙең ниндәй коллекцияғыҙ бар?



**1.** Познакомься с новыми словами.



уҡыусы парта **янында, эргәһендә**



ҡәләм пенал **эсендә**

П **2.** Прочитайте и продолжите диалог, заменяя выделенное слово другими словами (ручка, линейка, дәфтәр).

— Элина, **ҡәләмең** бармы?
— Эйе, бар.

— Ул ҡайҙа?
— Пенал эсендә.

Составьте свой диалог по образцу.

**3.** Игра в молчанку. Прочитай предложения и покажи, где находятся предметы.

Дәфтәр китап эсендә.
Портфель шкаф янында.
Ручка пенал эсендә.
Аҡбур таҡта янында.
Көндәлек портфель эсендә.
Алфавит таҡта эргәһендә.

**янында, эргәһендә** — рядом, возле, около
**эсендә** — в (предлог), внутри

**түңәрәк** — кружок

## 24 Ҡайҙа? Где?

A

— Аптыратайыммы?
— Аптырат.
— Ҡәләм ҡайҙа?
— Пенал эсендә.
— Пенал ҡайҙа?
— Портфель эсендә.
— Портфель ҡайҙа?
— Класс эсендә.
— Класс ҡайҙа?
— Мәктәптә.
— Мәктәп ҡайҙа?
— Урамда.
— Урам ҡайҙа?
— Ҡалала.

**1.** Познакомься с новыми словами.



портфель өҫтәл
**өҫтөндә**



портфель өҫтәл
**аҫтында**

п **2.** Прослушайте и продолжите диалог.

— Әсәй, минең ручкам ҡайҙа?
— Ана, өҫтәл аҫтында ята.
— Ә дәфтәрем ҡайҙа?
— ...

**3.** Прочитай текст, заменяя рисунки словами.

Артур  кә бара. Әсәһе уға , , ,  алды. Ләкин  уларҙы йыйып ҡуймай. , ,  яталар.  тора.

Как ты думаешь, Артур какой ученик?

**өҫтөндә** — на (предлог)
**аҫтында** — под (предлог)

**йыйып ҡуймай** — не убирает
**ята** — лежит

## Мин дәрестән сыҡтым — Я вышел с уроков

### 25 Нимә эшләйем? Что делаю?

**А** Әлиәнең дәрестә ҡәләме юҡ булды. Парта өҫтөндә генә ята ине. Пенал эсендә лә, сумкала ла юҡ. Ул Ләйсәнгә ҡараны: «Һин алдыңмы?» — тип һораны, асыуланып. «Юҡ», — тине Ләйсән. Ҡыҙҙар бер ҡәләм өсөн үпкәләштеләр. Ә ҡәләм ултырғыс аҫтында ята ине...

Ответь на вопросы.

1. Ҡыҙҙар нимә өсөн үпкәләштеләр?
2. Әлиә дөрөҫ эшләнеме?
3. Һеҙ нимә эшләр инегеҙ?

**1.** Познакомься с новыми словами.

түңәрәктәр



каратэ менән шөғөлләнәм



бейеү түңәрәгенә йөрөйөм



йыр түңәрәгенә йөрөйөм



һүрәт төшөрәм

**2.** Составь предложения из данных слов и запиши в тетрадь.

| | | |
|---|---|---|
| мин дәрестән һуң | бейеү<br>йыр<br>ҡурай<br>каратэ<br>ҡул эше | түңәрәгенә<br>йөрөйөм |

**П** **3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Кәрим, һин ниндәй түңәрәккә йөрөйһөң?
— Мин йыр түңәрәгенә йөрөйөм. Мин йыр яратам. Ә һин?
— Ә мин каратэға. Мин каратист булам, вәт.

**Т** **4.** Прочитайте стихотворение. Что вы знаете о курае? Поговорите об этом в группе.

## Ҡурай

Ҡурайҙы мин бик беләм,
Ағайым уйнай гелән.
Бейетеп йә йырлатып
Була ул ҡурай менән.

(Муса Ғәли)



**шөғөлләнәм** — занимаюсь
**бейеү** — танец
**йыр** — песня
**ҡурай** — курай

**асыуланып** — сердито
**үпкәләштеләр** — обиделись друг на друга
**ҡул эше** — рукоделие
**сәхнә** — сцена

## 26 Нимә эшләйем?
## Что делаю?

**А** Беҙ һеңлем менән мәктәптә төрлө түңәрәктәргә йөрөйбөҙ. Һеңлем бейеүгә һәм йырға йөрөй. Ул музыка ярата. Ә мин велоспорт менән шөғөлләнәм. Мин велосипедта йөрөргә яратам. Атайым менән әсәйем миңә байрамға тиҙ йөрөшлө велосипед бүләк иттеләр.

**1.** Познакомься с новыми словами. Составь предложения.

|  |  |  |  |
|---|---|---|---|
| таратам | һөртәм | әҙерләнәм | ярҙам итәм |

**П** **2.** Прочитайте текст.

### Тәнәфестә

Дәрес тамамлана. Тәнәфестә дежур уҡыусылар уҡытыусыға ярҙам итәләр. Бөгөн Әмир менән Лилиә дежур.

Уҡытыусы:

— Әмир, тактаны һөрт!

Әмир тактаны һөртә.

Уҡытыусы:
— Лилиә, дәфтәр тарат!
Лилиә дәфтәр тарата.
Мин дә уҡытыусыға ярҙам итәм.
Зифа, Роберт, Лина, Айбулат ял итәләр.
Улар уйнайҙар.



Ответь на вопросы.

1. Кем уҡытыусыға ярҙам итә?
2. Бөгөн кем дежур?
3. Әмир нимә эшләй?
4. Лилиә нимә эшләй?
5. Кемдәр ял итә?

**тарата** — раздаёт
**һөртә** — вытирает
**әҙерләнә** — готовится
**ярҙам итә** — помогает
**ял итә** — отдыхает

**тамамлана** — заканчивается
**тәнәфес** — перемена
**байрам** — праздник

## 27 Нимә эшләйем?
## Что делаю?

**А** Тәнәфес башланды. Мин бөгөн Айгөл менән дежур. Мин таҡтаны һөртәм. Алһыу Әмировна математика дәресенә әҙерләнә. Айгөл уҡытыусыға ярҙам итә. Ул контроль эш дәфтәрҙәрен тарата. Бөгөн контроль эш була.

**1.** Познакомься с новыми словами. Попробуй составить связный текст.

Мин дәрестән сыҡтым.



ашайым уйнайым дәрес әҙерләйем йоҡлайым

**2.** Составь предложения и запиши в тетрадь. Оцени свою работу.

мин дәрестән һуң

өйгә эш эшләйем
бейеү түңәрәгенә йөрөйөм
йоҡлайым
каратэ менән шөғөлләнәм

**3.** Расскажи о распорядке дня Алины.



# 28 Ҡабатлау
# Повторение





## 29 Кабатлау
## Повторение



## 30 Нимә? Нимәләр?
## Что?

**1.** Познакомься с новыми словами.




| | | | |
|---|---|---|---|
| Ҡыш бабай | Ҡарһылыу | ҡурсаҡ | бүләк |
| айыу | туп | шыршы | шар |

**2.** Сравни рисунки, измени слова по образцу.



туп — туп**тар**
ҡурсаҡ — ҡурсаҡ..
айыу — айыу**ҙар**
шар — шар..
машина — машина**лар**



**Т** **3.** Прочитайте текст. Обсудите содержание текста в группах.

Был уйынсыҡтар магазины. Унда матур туптар, самолёттар, машиналар, ҡурсаҡтар, трансформерҙар, динозаврҙар бар. Атайым Яңы йылға һеңлемә ҙур ҡурсаҡ, ә миңә трансформер алды. Мин Яңы йыл байрамын яратам!

**4.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть.

Ҡуян менән Ҡыш бабай
Икеһе лә аҡ ҡына.
Ҡурҡаҡ түгел Ҡыш бабай,
Ҡуян ҡурҡаҡ саҡ ҡына.

(Ҡадир Даян)



Это интересно

Прототип Деда Мороза жил в IV веке в Византии (сейчас Турция). В маленькой деревне жил старик Николай, который любил раздавать детям подарки. В Турции, в деревне Демре, поставлен памятник этому старику. Дети окружают старика Николая, держащего корзину с подарками.

**Ҡыш бабай** — Дед Мороз
**Ҡарһылыу** — Снегурочка
**ҡурсаҡ** — кукла
**айыу** — медведь
**туп** — мяч

**шыршы** — ёлка
**бүләк** — подарок

## 31 Нимә эшләйбеҙ?
## Что мы делаем?

А Тиҙҙән Яңы йыл етә. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу бүләктәр тарата: ҡыҙҙарға — ҡурсаҡтар, малайҙарға — машиналар. Балалар шатлана. Улар рәхмәт әйтә.

**1.** Познакомься с новыми словами.



шыршы биҙәй**беҙ**



өҫтәл әҙерләй**беҙ**



йырлай**быҙ**, бейей**беҙ**



шиғыр һөйләй**беҙ**



уйнай**быҙ**



салют ҡарай**быҙ**

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Беҙ шиғыр һөйләйбеҙ.

| | | |
|---|---|---|
| | шыршы | һөйләйбеҙ |
| | өҫтәл | әҙерләйбеҙ |
| беҙ | салют | ҡарайбыҙ |
| | бүләк | биҙәйбеҙ |
| | шиғыр | һалабыҙ |

**3.** Прочитай текст, заменяя рисунки словами. Оцени свою работу.

Тиҙҙән Яңы йыл. Беҙ  биҙәйбеҙ. Унда , , уйынсыҡ  эләбеҙ.  аҫтына  һалабыҙ.

**4.** Прочитай стихотворение. Выучи его и расскажи на празднике.

## Яңы йыл йыры

Бөгөн шыршыны
Биҙәйбеҙ бергә.
Иң матур байрам
Килә бит беҙгә.

Ҡарһылыу килә,
Йондоҙ һибелә.
Шатлыҡтар тейәп,
Ҡыш бабай килә.

(Сафуан Әлибай)



### Это интересно

В Италии под Новый год из окна выбрасывают старые вещи. В Индии Новый год встречают не в полночь, а на рассвете. В Японии в полночь 108 раз бьют в гонг, и жители обязательно должны переступить через порог — так они изменят свою жизнь к лучшему. Ровно в полночь, после ударов гонга, они должны лечь спать, а на рассвете поклониться восходящему солнцу и встретить Новый год.

**биҙәйбеҙ** — украшаем
**әҙерләйбеҙ** — готовим
**шиғыр һөйләйбеҙ** — рассказываем стихи

**тиҙҙән** — скоро
**эләбеҙ** — вешаем
**йондоҙ** — звезда

## 32 Ниндәй?
## Какой? Какая? Какое? Какие?

А Беҙҙең йортта биш малай,
Бишеһе лә дуҫ малай.
Уйнайбыҙ ҙа уйнайбыҙ,
Һис тә уйнап туймайбыҙ.

(Гөлфиә Юнысова)

Ответь на вопрос.

Беҙҙең йортта нисә малай?

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай с ними предложения.

Магазинда нимәләр бар?



ҡыҙыл туп




йәшел машина



аҡ айыу

**2.** Составь предложения из данных слов и запиши их в тетрадь.

| | | | |
|---|---|---|---|
| | йәшел | атым | |
| | зәңгәр | айыуым | |
| минең | аҡ | көрәгем | бар |
| | ҡара | ҡурсағым | юҡ |
| | ҡыҙыл | шарым | |
| | матур | ҡәләмем | |

Өлгө: Минең ҡыҙыл шарым бар.
Минең зәңгәр ҡәләмем юҡ.

П **3.** Прочитайте диалоги и составьте свои по образцу.

1) — Әминә, һин ҡайҙа барҙың?
— Магазинға.
— Нимә алдың?
— Ҡурсаҡ. Бигерәк матур, эйеме?
— Эйе, матур. Әйҙә бергә уйнайыҡ.
— Әйҙә.

2) — Алина, Ҡыш бабай бүләк бирҙеме?
— Эйе, ҙур аҡ айыу бирҙе.
— Ә беҙгә һоро робот менән ҡыҙыл машина бүләк итте.
— Ә һеҙгә?
— ...

**4.** Прочитай стихотворение. Не забывай про правильное произношение.

### Уйынсыҡтар магазины

Беҙҙең Гүзәл — һатыусы,
Башҡалары — алыусы.
Ана, асыҡ магазин,
Ашыҡмайса, әйҙә ин.
Һатыла уйынсыҡтар:
Шарҙар, туптар, ҡурсаҡтар...

(Айһылыу Йәғәфәрова)

Т **5.** Познакомьтесь с игрой «Магазин». Поиграйте на перемене.

Каждому игроку присваивается название одежды. Они — «товары» в магазине. Приходит покупатель.

— Туҡ-туҡ-туҡ!
— Кем бар унда?
— Мин.
— Һин кем?
— Алыусы.
— Ниңә килдең?
— Кейем алырға.
— Ниндәй кейем?
— Салбар (говорит название любой одежды).

Игрок с именем «салбар» бежит к продавцу. Если покупатель поймает его, то у него что-то берётся в залог. Игра продолжается. Когда залога наберётся много, начинается игра «Наказание»: каждый должен рассказать стихи, спеть, изобразить кого-либо, чтобы получить свою вещь.

**ҡыҙыл** — красный (-ая, -ое)
**ҡара** — чёрный (-ая, -ое)
**йәшел** — зелёный (-ая, -ое)
**зәңгәр** — голубой (-ая, -ое)

**һатыусы** — продавец
**алыусы** — покупатель
**ат** — пошадь

## 33 Нимә эшләмә?
## Чего не делай?

**А**

### Әсә зары

Аҡырып илай Марат,
Әллә нәмәләр һорап.
Алып бир, ти, машина.
Алып биргәс машина,
Велосипед кәрәк, тип
Иларға ул ашыға.
Кәрәк миңә кәнфит, ти,
Велосипед булғас та.
Мыжый әле, кеҫәһе
Кәнфит менән тулғас та.
Кибеткә Марат менән
Инмәйем инде башҡа.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)



**1.** Познакомься с новыми словами.



Туҙҙыр**ма**!



Ват**ма**!





Бысрат**ма**!



Ташла**ма**!

**Т** **2.** Прочитайте текст. Обсудите содержание в группах.

Атайым Айгөлгә матур ҡурсаҡ алды. Ә һеңлем ҡурсаҡтың күҙен, ҡашын ҡара ҡәләм менән буяған.

— Айгөл, ҡурсаҡты бысратма, ул матур бит.

— Ҡурсаҡ әсәйем кеүек эшкә бара.

П **3.** Выразительно прочитайте стихотворение. Теперь прочитай соседу. Оцените чтение друг друга.

## Шауламағыҙ!



Бик матур минең ҡурсағым —
Әсәйемә оҡшаған.
Шауламағыҙ! Ныҡ баҫмағыҙ!
Ҡурсағым да, әсәйем дә —
Икеһе лә йоҡлаған.

(Фәүзиә Рәхимғолова)

Ответь на вопросы.

1. Ҡурсаҡ кемгә оҡшаған?
2. Кемдәр йоҡлаған?
3. Ни өсөн шауларға ярамай?

**туҙҙырма** — не разбрасывай
**ватма** — не ломай
**быҫратма** — не пачкай
**ташлама** — не бросай

**кибет** — магазин
**мыжый** — капризничает
**кеҫә** — карман
**нык баҫмағыҙ** — не топайте

Запомни!

1. Партаға яҙма!
2. Китапты быҫратма!

# Мин уйнарға яратам — Я люблю играть

## 34 Нимә эшләйбеҙ? Что мы делаем?

**А** Малай һеңлеһенә: «Минең уйынсығыма теймә!» — ти. Ә һеңлеһе ағаһына: «Ә һин минең ҡурсағыма ҡағылма!» — ти. Балалар икеһе ике мөйөштә ултырып уйнай башлайҙар. Ләкин күп тә үтмәй, уларҙың икеһенә лә күңелһеҙ булып китә.

(Л. Толстойҙан)

**1.** Познакомься с новыми словами.



ҡар бабай яһайбыҙ



ҡар бәрешәбеҙ



«Тау хужаһы» уйнайбыҙ

Расскажи о зимних играх: какие игры знаешь? В какие игры играете с друзьями?

**Т** **2.** Прочитайте диалог, составьте свой по образцу.

— Малайҙар, дәрестән һуң нимә эшләйбеҙ?
— «Тау хужаһы»н уйнайбыҙ.
— Ҡайҙа?

— Мәктәп алдында.
— Мин тау хужаһы булам.
— Ярай, һөйләштек.

**3.** Выразительно прочитай стихотворение. Оцени своё чтение. Если не понравилось, прочитай ещё раз.

## Ҡар бабай

Ҡар бабай яһап ултырттыҡ,
Бейек буйлы, бик оло.
Күҙҙәре — ҡап-ҡара күмер,
Таяҡтан ике ҡулы.
«Ни өсөн ҙур?» — тиһегеҙме?
Уның сере яп-ябай:
Мәктәптән беҙҙең ҡайтҡанды
Алыҫтан уҡ, алыҫтан
Күреп торһон ҡар бабай.

(Фәкиһә Туғыҙбаева)

**ҡар** — снег
**ҡар бабай** — снеговик

**тау** — гора
**һыуыҡ** — холодно
**тау хужаһы** — хозяин горы
**һөйләштек** — договорились
**бейек буй** — высокий рост
**бик оло** — очень большой
**таяҡ** — палка

## 35 Нимә эшләйбеҙ?
## Что мы делаем?

### Ҡар бабай

А Ҡыштың йылы бер көнө ине. Беҙ мәктәптән ҡайтып киләбеҙ. Бер нисә бала уйнарға сыҡҡан. Беҙ уларға ҡушылдыҡ. Бергәләп ҡарҙан бабай яһаныҡ. Уға күмерҙән күҙ ҡуйҙыҡ. Ҡулына таяҡ тотторҙоҡ. Ҡулыбыҙ өшөнө, әммә ҡар бабай бик шәп килеп сыҡты.

**1.** Познакомься с новыми словами. Попробуй рассказать о себе.



сана шыуабыҙ



саңғы шыуабыҙ

Т **2.** Прочитайте диалог. Составьте свой по образцу. Обсудите свои варианты в группе.

— Урал ағай, бөгөн сана шыуабыҙмы?
— Юҡ, мин саңғы шыуам.
— Ә ниңә?
— Мин саңғы ярышына әҙерләнәм.

**3.** Разучите песню.

## Тышта ҡар яуа!

Тышта ҡар яуа,
Ниндәй саф һауа!
Әйҙә сығайыҡ,
Саңғы шыуайыҡ.
Ҡырға барайыҡ,
Юлдар ярайыҡ.
Биттәр ал булыр,
Яҡшы ял булыр.

(Ҡадир Даян)



**сана** — сани
**шыуабыҙ** — катаемся
**саңғы** — лыжи

**саф** — свежий (-ая, -ее)
**тышта** — на улице

## 36 Нимә эшләйбеҙ? Что мы делаем?

А Ҡышҡы каникулда олатайым менән өләсәйем янына ҡайтабыҙ. Олатайым өй алдына тау яһай. Алһыу һеңлем менән тауҙан сана шыуабыҙ. Эй күңелле! Рәхмәт олатайыма.

**1.** Познакомься с новыми словами.



катокка барабыҙ



конькиҙа шыуабыҙ



хоккей уйнайбыҙ

Т **2.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Сәләм, ҡыҙҙар!
— Сәләм, Айрат!
— Кискеһен нимә эшләйһегеҙ?
— Катокка барабыҙ. Һеҙ нимә эшләйһегеҙ?
— Беҙ малайҙар менән хоккей уйнайбыҙ.
— Катокта осрашырбыҙ.

**3.** Прочитай стихотворение и выучи наизусть.

## Беҙҙең катокта

Ялтыр боҙ шыжлай
Аяҡ аҫтында.
Шат йырҙар яңғырай
Алыҫ-алыҫҡа.
Ҡурҡытмай беҙҙе
Ҡышҡы һыуыҡ та.
Һәр саҡ күңелле
Беҙҙең катокта.

(Нәжип Иҙелбай)

## 37 Миңә нимә кәрәк?
## Что мне нужно?

**А** Ял көнө атайым, бабайым, ҡустым менән катокка барабыҙ. Беҙ конькиҙа шыуырға яратабыҙ. Катокта һыуыҡ, ә беҙ хоккей уйнайбыҙ. Шуға күрә өшөмәйбеҙ. Ҡапҡала ҡустым тора. Ул яҡшы ҡапҡасы. Атайым да оҫта уйнай икән!

**1.** Познакомься с новыми словами. Придумай словосочетания и предложения.



тун



бүрек



бейәләй



салбар



итек быйма



ойоҡ

**2.** Запомни! Эти слова не переводятся на башкирский язык.

**кофта, костюм, плащ, куртка, футболка, майка, шорты, бриджи, сарафан, колготки, юбка, кроссовки, кеды, туфли, ботинки, босоножки, чешки, бейсболка, фуражка, панама, бандана**

П **3.** Прочитайте текст, поставив вместо рисунков нужные слова. Оцените свою работу.

**Гәрәйҙең кейеме яңы.**  **,**  **,**  **уға быйыл ғына алдылар. Ләкин**  **уларҙы йыйып ҡуймай.**   **та ята.**   **аҫтында ята.**  **мөйөштә,**   **аҫтында булып сыға.**  **ҙең кейемдәрен өләсәһе йыуа, үтекләй, шкафҡа элә.**

Ответь на вопросы.

1. Малайҙың тәртибен нисек баһалайһың?
2. Аяҡ һәм өҫ кейемеңде нисек тәрбиәләйһең?

**4.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Мин быйма кейәм. Мин итек киймәйем.

| | | |
|---|---|---|
| мин | тун<br>салбар<br>быйма<br>итек<br>бейәләй | кейәм<br>киймәйем |

**кейәм** — надену, надеваю
**киймәйем** — не надену

# 38 Миңә нимә кәрәк?
# Что мне нужно?

## Беҙ уйнайбыҙ

**А** Беҙ уйнайбыҙ, уйнайбыҙ,
Уйындан һис туймайбыҙ.
Ҡыш килтергән һыуыҡтан
Ҡурҡып, өркөп тормайбыҙ.
Аяҡта — йылы бийма,
Ҡулда — мамыҡ бейәләй,
Улым өшөмәһен, тип,
Ялт-йолт энә бейетеп,
Уны өләсәй бәйләй.

(Файыҡ Мөхәмәтйәнов)

Ответь на вопрос.

Өләсәй нимә бәйләй?

**1.** Познакомьтесь с новыми словами: **кәрәк, кәрәкмәй.**

Әсәй:
— Улым, бийма кей.
— Әсәй, миңә бийма кәрәкмәй, миңә итек кәрәк.
— Тышта һыуыҡ бит.
— Бийма менән йүгереп булмай.



**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Миңә сана шыуырға быйма кәрәк.

| | | |
|---|---|---|
| миңә сана шыуырға | шорты<br>тун<br>быйма<br>панама<br>бейәләй | кәрәк<br>кәрәкмәй |

П **3.** Распределите слова по группам. Обсудите с соседом свою работу.

Ҡышҡы кейемдәр:
Йәйге кейемдәр:

шорты, туфли, быйма, сарафан, итек, күлдәк, тун, салбар, ойоҡ, бейәләй, шарф, панама, пальто, бүрек, юбка

П **4.** Поищите названия одежды. Кто больше найдёт, тот и молодец!

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| б | б | ы | й | м | а | п | а | л |
| е | ы | й | б | ү | р | е | к | ь |
| й | к | ү | л | д | ә | к | о | т |
| ә | а | к | л | о | б | т | у | ф |
| л | т | у | н | б | а | р | и | л |
| ә | р | а | б | л | а | а | к | б |
| й | ә | п | ә | л | ш | э | а | ю |

**кәрәк** — надо
**кәрәкмәй** — не надо

## 39 Нисәнсе?
## Какой? Какая? Какое? Какие?

А
— Аптыратайыммы?
— Аптырат.
— Аптырат ҡайҙа?
— Кеҫәлә.
— Кеҫә ҡайҙа?
— Салбарҙа.
— Салбар ҡайҙа?
— Шкафта.
— Шкаф ҡайҙа?
— Өйҙә.
— Өй ҡайҙа?
— Урамда.
— Урам ҡайҙа?
— Ҡалала.

**1.** Рассмотри рисунок и составь предложения.



**2.** Познакомься с новыми словами. Обрати внимание на окончания.

| | |
|---|---|
| бер**енсе** | алты**нсы** |
| ик**енсе** | ет**енсе** |
| ө**сөнсө** | һигеҙ**енсе** |
| дүрт**енсе** | туғыҙ**ынсы** |
| биш**енсе** | ун**ынсы** |

П **3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Кисә ҡыҙыҡ уйын уйнаныҡ.
— Ниндәй?
— «Тау хужаһы» уйынын.
— Ә-ә, беләм. Кем менән уйнанығыҙ?
— Өсөнсө класс малайҙары менән.
— Кем хужа булды?
— Беҙ.

Т **4.** Из предложенных слов составьте предложения. Обсудите предложения в группе.

Уҡыйым, икенсе, мин, класта.
Ярышта, алдым, урын, беренсе.
Ултырам, партала, дүртенсе, мин.
Уҡый, апайым, класта, бишенсе.

**ярыш** — соревнование
**урын** — место

**саңғы ярышы** — лыжное соревнование
**еңеүсе** — победитель

# 40 Ҡабатлау
# Повторение



## 41 Был нимә?
## Что это?

**1.** Познакомься с новыми словами.







**2.** Научись задавать вопрос и отвечать на него.



бесәй     эт    көсөк     тутыйғош

Өлгө: Был нимә? Был тутыйғош.
Был нимә? Уның суҡышы.

П **3.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Ой, Женя, был нимә?
— Был ташбаҡа.
— Нимә, нимә?
— Ташбаҡа. Ҡурҡма, ул аҡыллы.
— Ә ул нимә ашай?
— ...

Составьте по образцу диалог.

**4.** Спиши предложения. Вместо точек подбери нужное слово. Обменяйтесь с соседом работами и оцените работы.

Минең ... (бесәйем, этем) бар. Уның ҡушаматы ... (Барсик, Аҡтүш, ...).
Мин ... (бесәйемде, этемде) яратам.

Это интересно

Ташбаҡа — черепаха, слово «таш» — камень, «баҡа» — лягушка. Получается, что черепаха — каменная лягушка. А так назвали её из-за твёрдого, как камень, панциря. Черепахи живут долго.

## 42 Ниндәй?
## Какой? Какая? Какое? Какие?

**А** — Атай, әйҙә тутыйғош һатып алайыҡ, — ти Сәлим атаһына.

— Ә кем уны тәрбиәләр? — ти атаһы.

— Быны ул үҙе әйтер, — тип яуаплай Сәлим.

**1.** Прочитай текст.



Минең бесәйем бар. Ул ап-аҡ, ялбыр йөнлө. Маңлайында ҡара таптары бар. Мин уны Ҡараҡаш тип йөрөтәм. Бесәйем һөт ярата. Эсеп туйғас, йөнтәҫ тәпәйҙәре менән битен йыуа. Ҡойроғо менән уйнарға ярата.

Ответь на вопросы.

1. Бесәйҙең ҡушаматы нисек?
2. Уны һүрәтлә: Бесәйем ҙур, бәләкәй.
   Йөнө ҡара/аҡ. Тәпәйҙәре йөнтәҫ/йомшаҡ.

**2.** Какие породы кошек ты знаешь? Что интересного про них можешь рассказать?

### Это интересно

Кошки в доме живут 15 лет, а на природе 3—5 лет. Кошки могут издавать до 100 разных звуков, а собаки только 10. Кошки «лечат» людей, успокаивают.

**ялбыр йөнлө** — длинношёрстный (-ая, -ое)
**йөнтәҫ** — мохнатый (-ая, -ое)
**йомшаҡ** — мягкий (-ая, -ое)
**маңлай** — лоб

**таптар** — пятна
**тоҡом** — порода
**битен йыуа** — умывается
**тәрбиәләй** — ухаживает

## 43 Ниндәй?
## Какой? Какая? Какое? Какие?

**А**



### Аҡтүш

Аҡтүш исемле
Этем бар минең.
Һин уны күрһәң,
Ҡыҙығыр инең.
Үҙе бәләкәс,
Ҡолағы һалбыр,
Ә түше ап-аҡ,
Ҡойроғо ялбыр.
Мороно осло,
Тәпәйҙәре ныҡ,
Күҙендә, гүйә,
Балҡып тора ут.

(Абдулхаҡ Игебаев)

**1.** Какие породы собак тебе нравятся?

Өлгө: Миңә боксёр оҡшай. Ул көслө.

**Т** **2.** Научитесь задавать вопрос и отвечать на него.

— Эт ниндәй? Эт (көслө, ҙур, уҫал, аҡыллы...)
— Бесәй ниндәй? Бесәй (иркә, йомшаҡ, йөнтәҫ, матур...)

**П** **3.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Сәләм, Артур! Был һинең этеңме?
— Эйе, минеке.
— О-о-о! Бик шәп эт! Ҡушаматы нисек?
— Рекс. Ә һинең этең бармы?
— Юҡ, бесәйем генә бар. Ул...
— Ә минең этем...

Это интересно

Во Франции сенбернару поставлен памятник. Эта собака спасала людей, сбившихся с пути в горах. Сенбернар спас 40 человек, а 41-й убил собаку, приняв её за волка.

## 44 Ни эшләй?
## Что делает?

**А** Бесәй, бесәй, бесәй, шул,
Бесәй әле кескәй, шул.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,
Әллә ул шулай йырлай.

— Килтерегеҙ сысҡан, — ти,
— Ҡайҙа һуң ул ҡасҡан? — ти,



Килтерегеҙ хәҙер, — ти,
Мин ашарға әҙер, — ти.
Бына ниндәй бесәй ул,
Әлегә бик кескәй шул.

(Ҡадир Даян)

Как ты думаешь, это большой кот или котёнок?

**1.** Познакомься с новыми словами.

| | | | |
|---|---|---|---|
|  |  |  |  |
| йоҡлай | ҡаршылай | һикерә | уйнай |

п **2.** Научитесь задавать вопрос и отвечать на него.

| | |
|---|---|
| Эт ни эшләй? | Эт өрә, һаҡлай, ырғый … . |
| Бесәй ни эшләй? | Бесәй мырлай, шаяра, битен йыуа … . |
| Ташбаҡа ни эшләй? | Ташбаҡа йәшенә, йоҡлай … . |
| Тутыйғош ни эшләй? | Тутыйғош ҡабатлай, үсекләй … . |

**3.** Выпиши в два столбика имена кошек и собак.

Джек, Аҡтүш, Лайка, Һарыбай, Мурка, Мырауҡан, Муйнаҡ, Полкан, Аҡтырнаҡ, Бим, Барсик…

**4.** Прочитай текст. Попробуй пересказать. Оцени свою работу.

Минең этем бар. Уның ҡушаматы — Бим. Бим — ҙур эт. Ул көслө, уҫал, бик аҡыллы. Көн дә мәктәптән ҡаршылай, уйнай. Мине ярата, күтәреп ала, һағына.

**5.** Расскажи о своём любимом животном.

**өрә** — лает
**мырлай** — мурлычет
**йәшенә** — прячется
**ҡабатлай** — повторяет

**үсекләй** — дразнит
**шаяра** — играет
**һаҡлай** — охраняет
**һалбыр ҡолаҡлы** — лопоухий (-ая, -ое)

## 45 Ни эшләй?
## Что делает?

А

Бесәй, бесәй,
Бес-с, бес-с...
Баҙға төшкән,
Һөт эскән,
Өйгә инеп
Ҡасҡан.

(Халыҡ ижадынан)



**1.** Прочитай текст.

Тыуған көнөмә атайым аквариум бүләк итте. Вәт шәп булды! Әсәйем менән магазиндан балыҡтар ҙа һатып алдыҡ. Шундай матурҙар!

Аквариумда балыҡтар рәхәтләнеп йөҙә, ашарға эҙләй. Мин уларҙы ашатам, күҙәтеп ултырам. Бесәйем дә ҡарап ултыра, тәпәйе менән аквариумға һуғып ала. Был балыҡтарға тейергә ярамай шул!

Озаглавь текст.

Прочитай предложения. Отметь правильные варианты.

| | + | – |
|---|---|---|
| 1. Атайым менән магазиндан балыҡтар һатып алдыҡ. | | |
| 2. Балыҡтар йөҙә, ашарға эҙләй. | | |
| 3. Бесәйем ҡойроғо менән аквариумға һуғып ала. | | |

Т **2.** Прочитайте диалог.



— Ринат, балыҡҡа бараһыңмы?

— Эйе, барам.

— Иртәнге биштә китәбеҙ.

— Бик иртә бит!

— Олатайым иртән балыҡ шәп эләгә, ти.

Поговорите в группе о секретах рыбалки.

**йөҙә** — плавает
**ашарға эҙләй** — ищет еду

**күҙәтеп ултырам** — наблюдаю
**һуғып ала** — постукивает

## 46 Ҡайҙа? Где?

**А**

— Айҙар, балыҡҡа бараһыңмы?

— Юҡ, бармайым.

— Ә ниңә?

— Аквариумдағы балыҡтарҙы ашатырға, һыуын алыштырырға кәрәк.

— Өйҙәге балыҡты ҡарауы еңел түгел икән.

**1.** Ты знаешь этих животных? Вспомни, где их видел. Где они живут?



Өлгө: Фил Африкала йәшәй.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** урманда, ағас башында, зоопаркта, сүллектә, тайгала.

**2.** Внимательно прочитай текст и скажи, о каком животном идёт речь.

а) Был хайуан ҙур. Ул Африкала, Һиндостанда йәшәй. Ҡолаҡтары ҙур, мороно оҙон, аяҡтары йыуан, ҡойроғо бәләкәй генә. Ул сысҡандан ҡурҡа.

б) Был хайуан бәләкәй. Африкала, Һиндостанда йәшәй. Ул банан ярата.

**3.** Найди пары слов и соедини стрелкой.



| | |
|---|---|
| эт | ерҙә |
| бесәй | ағас башында |
| ташбаҡа | аквариумда |
| балыҡ | диванда |
| тутыйғош | ояла |



Т **4.** Опишите одно животное. Другие группы должны угадывать. Оцените свою работу.

### Это интересно

Слово «верблюд» произошло от арабского слова «красота». Верблюды могут полностью закрыть свои ноздри от ветра и песка, когда необходимо. Они могут выпивать до 200 литров воды зараз. Если верблюд лёг спать или просто отдохнуть, то заставить его встать невозможно, пока он сам не захочет этого. Верблюды могут

пинать ногами во всех четырёх направлениях. Их мех отражает солнечный свет и защищает тело от высокой температуры пустыни.

В Северной Африке верблюд является священным животным.

## 47 Ҡайҙа? Где?

**А** Азат менән Фәниә тәнәфестә һөйләшәләр.

— Әйҙә зоопарк уйнап алайыҡ.

— Әйҙә. Тик нисек була ул?

— Мин маймыл булам, — ти Фәниә. — Һин мине банан менән һыйла.

**1.** Ты знаешь этих животных? Вспомни, где их видел.

| | | |
|---|---|---|
| <br>айыу | <br>бүре | <br>төлкө |
| <br>тейен | <br>ҡуян | <br>терпе |

**2.** Составь предложения из данных слов. Оцени свою работу после проверки в классе.

| | | |
|---|---|---|
| айыу<br>бүре<br>тейен<br>төлкө | тауҙа<br>урманда<br>өңдә<br>ағаста | йәшәй<br>йәшәмәй |

**3.** Прочитай стихотворение о ёжике. Постарайся правильно произносить все звуки.



Терпе йоҡламай,
Терпе ашамай.
Беҙҙең өйөбөҙ
Уға оҡшамай.
Уйлайҙыр: күпме
Шулай ятырға?
Ярамағандыр
Уны урмандан
Алып ҡайтырға.

(А. Насретдинова)

**4.** Отгадай загадку.

Сәтләүек ярып ултыра
Ағас башында ... .
Ҡойроғо электән ҡупшы,
Өҫтөндә — матур кейем.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | | | |

**ҡупшы, матур** — красивый (-ая, -ое)

**сәтләүек** — орех

## 48 Ҡайҙан?
## Откуда?

A Борон-борон заманда эт үҙенә хужа эҙләп киткән. Уға бүре осраған. Бүре менән эт бер аҙ йәшәгән. Ләкин бүренең айыуҙан ҡурҡҡанын күргән. Эт айыу менән йәшәй башлаған. Тик айыу арыҫландан ҡурҡа икән. Эт арыҫлан менән йәшәй башлаған. Ә арыҫлан кешенән ҡурҡҡан. Эт кешенең бөтә нәмәнән дә көслө булыуын күргән һәм унда йәшәргә ҡалған.

Попробуй восстановить содержание текста по схеме.

Эт — бүре — айыу — арыҫлан — кеше — хужа.

**1.** Прочитай предложения, сравни выделенные слова. Ты заметил разницу в языках?

Айыу **урманда** йәшәй. Медведь живёт **в лесу.**
Айыу **урмандан** сыға. Медведь выходит **из леса.**

**2.** Внимательно прочитай слова в столбиках. Какой «секрет» ты увидел? Продолжи по образцу.

| **Ҡайҙа?** | **Ҡайҙан?** |
| --- | --- |
| ағас**та** | ағас**тан** |
| өң**дә** | өң**дән** |
| тау**ҙа** | тау**ҙан** |
| өй.. | өй.. |
| зоопарк.. | зоопарк.. |

**3.** Эти животные тебе знакомы? Какие сказки ты знаешь про этих животных? Составь предложения с этими словами.



ҡурҡаҡ ҡуян



көслө айыу



уҫал бүре



хәйләкәр төлкө

Өлгө: Хәйләкәр төлкөнөң йорто боҙҙан була.
Уҫал бүре Ҡыҙыл Башлыҡты ашай.

**4.** Отгадай загадку.

Йәйен — урманда батша,
Ҡышын ҡарҙан да аҫта.

**сыға** — выходит
**ағас** — дерево
**ҡаса** — убегает

**ҡурҡаҡ** — трусливый (-ая, -ое)
**уҫал** — злой (-ая, -ое)
**әнәле** — колючий (-ая, -ее)
**хәйләкәр** — хитрый (-ая, -ое)

## 49 Ҡасан?
## Когда?

А Мин телевизор ҡарарға яратам. Миңә мультфильмдар, хайуандар донъяһы тураһында тапшырыуҙар оҡшай. Жирафтар, зебралар, кәнгәрәләр, маймылдар, крокодилдар, бегемоттар, арыҫландар тураһында тапшырыуҙар булды. Мин шуларҙы ҡараным, күп нәмә белдем.

Названия каких животных не переводятся? Что ты знаешь о них? Принеси свои книжки и расскажи друзьям.

**1.** Учимся задавать вопрос и отвечать на него.

| **Ҡасан?** | **Когда?** | **Ҡайҙа?** | **Где?** |
|---|---|---|---|
| бөгөн | сегодня | өңдә | в норе |
| кисә | вчера | ағас башында | на дереве |
| иртәгә | завтра | урманда | в лесу |
| иртән | утром | ситлектә | в клетке |
| кис көнө | вечером | тауҙа | на горе |

П **2.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Сәләм, Денис!
— Һаумы, Гриша! Ҡайҙа барҙың?
— Класс менән урманға экскурсияға барҙыҡ.
— Оҡшанымы?
— Эйе. Беҙ унда терпе күрҙек.
— Ысынмы?
— Эйе. Терпене тотоп ҡараныҡ.
— ...

**3.** Прочитай текст.



Кисә беҙ урманға экскурсияға барҙыҡ. Унда ҡыҙыҡ икән! Ағас башында тейенде күрҙек. Ул бик етеҙ, күҙҙәре ҡара, ҡойроғо йөнтәҫ. Ә терпе бәләкәй, энәләре осло. Төлкө бик хәйләкәр. Беҙ уны күрмәнек.

Ответь на вопросы. Не забудь обращаться к тексту.

1. Тейен ҡайҙа йәшәй?
   Тейен ... йәшәй.
2. Терпе ниндәй?
   Терпе ..., энәләре ... .

**Это интересно**

Учёные-генетики доказали, что на самом деле зебра — белая в чёрную полоску, а не наоборот. Каждая зебра имеет уникальный рисунок из чёрных и белых полос, подобно отпечаткам пальцев у человека. По рисунку детёныш зебры узнаёт свою мать. Интересно, что зебры спят не стоя, как все лошади, а лёжа.

## 50 Ҡасан? Когда?

**А** Йәшәгән, ти, төлкө менән терпе. Төлкөнөң күлдәге бик матур икән, ә терпенең күлдәге һоро ғына булған. Төлкө:

— Минең күлдәгем матур, ә һинеке йәмһеҙ. Шуға һине бер кем дә яратмай, ә мине бөтәһе лә ярата, — тигән.

Терпенең асыуы килгән. Шунан үҙенә икенсе энәле күлдәк алып кейгән. Төлкө терпенең күлдәген тотоп ҡарауы булған — илап та ебәргән. Терпе төлкөнө шулай итеп аҡылға ултыртҡан.

**1.** Ты знаешь этих птиц? Познакомься с новыми словами.



турғай ҡарға тумыртҡа сыйырсыҡ

Т **2.** Прочитайте диалог. Что вы знаете об этой птице?

— Мин бөгөн урман докторын күрҙем.
— Бәй, урман докторы булалыр шул?
— Була. Был ҡош урманды ҡорттан таҙарта.
— Ниндәй ҡош ул?
— Тумыртҡа.

**3.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Тумыртҡа урманда туҡылдай.

| **Нимә?** | **Ни эшләй?** |
| --- | --- |
| һандуғас | ҡарҡылдай |
| ҡарға | һайрай |
| тумыртҡа | туҡылдай |

**4.** Отгадай загадку.

Көнө буйы туҡ та туҡ,
Ағастан ҡорт табып туҡ.
Ағасты ашаған ҡортҡа
Иң ҙур дошман ... .

**5.** Прочитай сказку.

## Ҡарға менән турғай



Ҡарға турғай тотҡан. Төлкө:

— Ҡарға, нимә тоттоң?

— Турр... тур... — тигән ҡарға.

— Ишетмәйем!

— Турғай! — тип ҡысҡырған ҡарға.

Турғай осоп киткән. Төлкө ҡарғаға:

— Ҡош, тип әйтергә ине, — ти икән.

**6.** Придумайте сказку про птиц.

### Это интересно

Существует легенда о том, что именно воробей выдал Иисуса Христа своим чириканьем, за это Господь покарал птицу, сделав её маленькой и серенькой. Также легенда рассказывает, что с тех пор на его лапки надеты невидимые оковы, из-за которых ему приходится всё время прыгать.

**тотҡан** — поймал
**осоп киткән** — улетел
**дошман** — враг

**ишетмәйем** — не слышу
**ҡысҡырған** — крикнул
**ҡорт** — червь

## 51 Ҡайҙа? Где?

А Малайҙар урмандан терпе алып ҡайтты. Тәүҙә терпене Булат ҡараны. Уға икмәк, һөт бирҙе. Икенсе көндө уны Марат ашатты. Уға алма бирҙе. Бер нисә көндән һуң малайҙар терпене онотто. Ул юғалды. Урманға ҡайтып барғанда, терпене машина тапаған ине.

Ответь на вопросы.
1. Терпе менән нимә булды?
2. Малайҙар урынында һин булһаң, нимә эшләр инең?

**1.** Познакомься с новыми словами. Что ты знаешь об этих птицах?


һайыҫҡан


бөркөт


күгәрсен


кәкүк

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Бөркөт ҡаяла йәшәй, ҡалала йәшәмәй.

| | | |
|---|---|---|
| тумыртҡа<br>кәкүк<br>күгәрсен<br>бөркөт | ҡаяла<br>ҡалала<br>урманда<br>ауылда | йәшәй<br>йәшәмәй |

**3.** Прочитай стихотворение. Что ты знаешь о кукушках?

## Кәкүк менән Өлфәт



— Кәкүк, кәкүк, миңә әле
Нисә йәш, һанап күрһәт? —
Тип һораны юрый ғына
Кәкүктән бер көн Өлфәт.

— Бер-ике-өс... —
Һанай кәкүк. —
Дүрт-биш-алты-ете, — ти,
Етегә еткәс туҡтаны:
— Ете булғас, етте! — ти.

Ҡысҡырып ебәрҙе Өлфәт:
— Яңылыштың, кәкүк дуҫ!
Минең йәште белгең килһә,
Икегә һин өстө ҡуш!

(Факиһа Туғыҙбаева)

### Это интересно

В 1146 году в Египте появилась первая государственная голубиная почта. В XI—XIII веках почтовый голубь стоил столько же, сколько чистокровный арабский жеребец. А Древний Вавилон был городом голубей. В 2004 году во Владивостоке открылся памятник голубю как символу мира. Подобные памятники установлены ещё в 33 городах по всему свету.

**ҡалала** — в городе
**ауылда** — в деревне
**туҡтаны** — остановился

**яңылыштың** — ошибся
**юрый ғына** — понарошку

## 52 Ҡайҙа? Ҡасан?
## Где? Когда?

### Турғай

А Көн һыуыҡ ине. Тәҙрә төбөнә турғай килеп ҡунды. Тәҙрә янында Марат тора ине. Ул форточканы асты. Турғай өйгә осоп инде. Марат уны ашатты. Туйғас, турғай осоп сығып китте.

**1.** Познакомься с новыми словами.


һандуғас


ҡарлуғас


торна


аҡҡош

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Сыйырсыҡ ситлектә һайрамай.

| | | |
|---|---|---|
| ҡарлуғас | күктә | оса |
| сыйырсыҡ | бейектә | осмай |
| бөркөт | ситлектә | йәшәмәй |
| тумыртҡа | урманда | һайрамай |

П **3.** Прочитайте диалог и продолжите. Что вы знаете о перелётных птицах?

— Айһылыу һеңлем, тиҙҙән йылы яҡтан ҡоштар ҡайта.

— Ағай, ә ниндәй ҡош иң беренсе ҡайта?

— Иң алда ҡарға ҡайта.

— Ә тағы ниндәй ҡоштар ҡайта?

— Торналар, аҡҡоштар, ..., ..., ..., ... .

**4.** Прочитай стихотворение о ласточке. Выучи его наизусть.



Мин ҡарлуғас, ҡарлуғас,
Ҡайттым бына яҙ булғас.
Оя юҡ тип ҡайғырмайым,
Бейек, текә яр булғас.

(Гөлфиә Юнысова)

Т **5.** Игра «Птицы». Один ученик описывает птицу, не называя её. Остальные должны угадать.

Өлгө: а) Был ҡош аҡ, матур. Муйыны оҙон. Уның тураһында Ганс-Христиан Андерсен әкиәт яҙған.

б) Был ҡош ҙур, суҡышы осло. Ул бейектә оса. Ул ҡуян, төлкө ашай.

в) Был ҡош бәләкәй. Ул матур һайрай. Уның тураһында И. Крылов мәҫәл (басня) яҙған.

**күк** — небо
**оса** — летает
**яҙ** — весна
**бейек** — высоко

**һайрай** — поёт
**оя** — гнездо
**яр** — берег

### Это интересно

Лебеди — красивые, величественные птицы, близкие родственники гусей. Это самые крупные водные птицы.

В мире существует 7 видов лебедей. На территории нашей страны гнездятся лебедь-шипун и лебедь-кликун.

Лебеди — рекордсмены по высоте полёта. Они могут подняться на высоту более 8200 метров.

## 53 Был нимә? Что это?

**1.** Познакомься с новыми словами.



ат ҡолон



һыйыр быҙау үгеҙ



һарыҡ



кәзә



сусҡа

**2.** Детёныши животных называются вот так:

козлёнок — кәзә бәрәсе
ягнёнок — һарыҡ бәрәсе
поросёнок — суҫка бәрәсе (балаһы)
телёнок — быҙау
жеребёнок — ҡолон

**3.** Спиши текст, вставляя пропущенные слова. Проверь и оцени свою работу.

Минең ... бар. Уның ҡушаматы — ... . Ул ... төҫтә. Уның ҡолаҡтары ..., йөнө ... . Аҡбай бәләкәй ... менән уйнай. Мин көсөгөмдө ... .

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** көсөгөм, Аҡбай, аҡ, ҡара, йомшаҡ, туп, яратам.

**4.** Перечисли своих любимых животных и расскажи о них.

Это нужно знать!

В башкирском языке только о человеке можно спрашивать **кто? кем?** Был кем? Это кто? Это Серёжа. А животные и птицы отвечают на вопрос **что? нимә?**

Был нимә? Был эт. В русском языке: Это кто? Это собака.

Это интересно

Во многих башкирских народных сказаниях лошади уделено особое внимание. В башкирской мифологии Толпар — это сказочный крылатый конь, рождённый в пучине вод. Акбузат — крылатый небесный конь. В башкирском народном эпосе «Урал-батыр» Акбузат — верный друг башкирского батыра.

## 54 Был нимә?
## Что это?

А **Өҫтәл янында**

Ашаным бер тәлкәнә,
Ҡыҙғанысмы, көлкәмә?
Крокодилды ашаным,
Фил кимерә башланым.
Ышанмаһаң, һин дә кил,
Артып ҡалды ике фил,
Өс тауыҡ, алты һарыҡ,
Ике ҡуян, ун балыҡ.
Бөтәһе лә табында —
Печеньелар ҡабында.

(Зарема Әхмәтйәнова)



**1.** Познакомься с новыми словами.



ҡаҙ → бәпкә ← өйрәк

күркә → себеш ← тауыҡ

п **2.** Прочитайте диалог и обсудите.



— Әсәй!
— Нимә булды, балам?
— Мине ҡаҙ баҫтырҙы.
— Бәпкәһенә тейҙеңме?
— Эйе, уйнарға ине.
— Ҡаҙ янына барма, бәпкәләренә теймә, ҡыҙым!

**3.** Расскажи интересные случаи из своей жизни.

**4.** Прочитай стихотворение. Переведи выделенные слова на русский язык.

## Бәләкәстәр

Һыйырҙың **быҙауы** бар,
Өйрәктең — **бәпкәләре**,
Аҡбайҙың — **көсөктәре**,
Тауыҡтың — **себештәре**.
Аттың **ҡолонсағы** бар,
Һарыҡтың — **бәрәстәре**.

(Айһылыу Йәғәфәрова буйынса)

**бәләкәстәр** — малыши
**тейҙеңме?** — трогала?
**баҫтырҙы** — погнался

## 55 Нимәгә?
## Кому? Чему?

А Һыйыр, ат һәм эт:
— Кеше кемде ярата? — тип һөйләшәләр.
— Мине, — ти ат. — Мин йөк ташыйым.
— Юҡ, мине, — ти һыйыр. — Мин һөт бирәм.
— Юҡ, мине, — ти эт. — Мин өй һаҡлайым.
Бер кеше был һөйләшеүҙе ишетә лә:
— Һеҙ барығыҙ ҙа беҙгә кәрәк. Беҙ һеҙҙе яратабыҙ, — ти.

(К. Ушинскийҙан)

**1.** Внимательно прочитай и сравни слова в двух столбиках. Продолжи данные ряды слов.

| **Нимә?** | **Нимәгә?** |
|---|---|
| ат | ат**ҡа** |
| сусҡа | сусҡа**ға** |
| әтәс | әтәс**кә** |
| күркә | күркә**гә** |
| тауыҡ | … |
| ҡаҙ | … |
| бәпкә | … |

**П** **2.** Прочитайте текст.

Ильяс каникулда ауылға бара. Унда олатаһы менән өләсәһе йәшәй. Ильяс уларға ярҙам итә. Олатаһы һыйырға бесән бирә, ә ул һарыҡтарҙы ҡарай. Өләсәһе тауыҡтарҙы ашата, ә Ильяс бесәйгә һөт бирә. Ауылда тағы ла ат, кәзә, күркәләр бар. Ильяс уларҙы ла ҡарай. Олатаһы менән өләсәһе шатлана.

Ответьте на вопросы и оцените свою работу.

1. Ильяс каникулда **ҡайҙа** бара?
2. Унда **кем** йәшәй?
3. Ауылда **ниндәй** йорт хайуандары бар?



**3.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Этҡә һөйәк бир.

| | | |
|---|---|---|
| һыйырға | бесән | кәрәк |
| бесәйгә | ем | кәрәкмәй |
| тауыҡҡа | һөт | бир |
| этҡә | һөйәк | бирмә |

**4.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Айрат, һинең олатайың менән өләсәйең бармы?
— Эйе, бар.
— Улар ҡайҙа йәшәй?
— Улар ауылда йәшәй.
— Ә ҡайһы районда?
— ...

**ауыл** — деревня

**ҡарай** — смотрит, ухаживает
**бесән** — сено
**ем** — корм
**һөйәк** — кость

## 56 Ҡабатлау
## Повторение

**А** Сыбар тауыҡ ояһынан төштө. Себештәре йүгерешеп уйнайҙар ине. Ҡапыл улар сипылдаштылар. Себештәр янына уҫал бесәй килгән икән. Тауыҡ бесәй өҫтөнә ташланды, уның ҡолағын суҡып алды. Бесәй ҡасып китте.

Отметь правильные предложения.

1. Сыбар тауыҡ ояһынан төштө.
2. Себештәре йоҡлай ине.
3. Уҫал бесәй килгән икән.
4. Тауыҡ бесәйҙең ҡолағын суҡып алды.

**1.** Найди ошибки художника.

  бирә.

  һала.

  ташый.

  тота.

**2.** В таблице спрятаны названия домашних животных и птиц. Кто быстрее их найдёт, тот и молодец.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| к | ә | з | ә | к | ө | с | ө | к |
| ү | ғ | а | т | а | у | ы | ҡ | а |
| р | ң | б | ә | р | ә | с | л | ҙ |
| к | э | т | с | у | с | ҡ | а | н |
| ә | ө | й | р | ә | к | б | ә | п |
| ҫ | һ | ы | й | ы | р | р | ә | к |

Т **3.** Прочитайте текст. Обсудите содержание в группе.

Иң бәләкәй ат — Горбунок. Ул ишәк кеүек оҙон ҡолаҡлы, йөнтәҫ була. Уның арҡаһында ике үркәсе лә бар. Иң ғәжәп ат — доктор Айболиттың дуҫы Тянитолкай. Уның ике башы, дүрт тояғы була, ә ҡойроғо юҡ.

Каких лошадей вы знаете?

Это интересно

Лошадь — священное животное двадцати трёх народностей. Австралийский жеребец Нобби признан самой большой лошадью в мире. Он весит больше тонны, а его рост составляет 2,05 м. Своими объёмами конь напоминает маленький автомобиль. Миниатюрные лошади отличаются маленьким ростом (60—86 см). Вес этих крошечных лошадок колеблется в пределах 20—65 кг.

По версии Книги рекордов Гиннесса, самая маленькая в мире лошадка — Тамбелина. Её рост составляет всего 45 см, а вес — 26 кг.

**йомортҡа** — яйцо

**йөк** — воз
**ғәжәп** — удивительный (-ая, -ое)
**үркәс** — горб

# 57 Ҡабатлау
# Повторение





# 58 Ҡабатлау
# Повторение



# 59 Ҡасан?
# Когда?

**1.** Познакомься с новыми словами.



| иртә<br>(иртәнсәк) | төш<br>(төш ваҡытында) | кис<br>(кискеһен) |
|---|---|---|

**2.** Составь предложения из данных слов.

Өлгө: Мин кис көнө киноға барам.

| | | |
|---|---|---|
| | иртән | киноға барам |
| мин | төш ваҡытында | велосипедта йөрөйөм |
| | кис көнө | мәктәпкә барам |

**3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Атай, кискә киноға барабыҙмы?
— Эйе.
— Ниндәй кинотеатрға?
— «Кинопростор»ға. Ниндәй кино ҡарағың килә?
— «Мадагаскар». Тик 3D-ға, яраймы, атай?

**4.** Прочитай текст, заменяя рисунки словами. Оцени свою работу.

Мин  сәғәт ҙа торам. ,  йыуам,  менән  эсәм.  менән  барам. Унда йәйге лагерь эшләй. ,  менән киноға барабыҙ, уйнайбыҙ, һүрәт төшөрәбеҙ, ярышабыҙ. Төш етә. ҙә төшкө аш ашайбыҙ һәм өйгә ҡайтабыҙ.  лә атай менән әсәй эштән ҡайта. Каникулда рәхәт!

Т **5.** Поговорите о правилах езды на велосипеде.

**иртә** — утро
**төш** — полдень
**кис** — вечер

**йәйге** — летний (-яя, -ее)
**үткәрәбеҙ** — проводим
**рәхәт** — хорошо

## 60 Ҡасан? Когда?



А Камилдың башы ныҡ ауырта, температураһы күтәрелгән. Әсәһе врач саҡыртты. Врач:

— Камил, һыуыҡ һыу эстеңме?
— Юҡ.
— Ә нимә эшләнең?

— Иртәнән кискә тиклем велосипедта йөрөнөм.
— Бейсболка кейҙеңме?
— Юҡ.
— Төшкө эҫелә урамда бейсболкаһыҙ йөрөргә ярамай бит. Башыңа ҡояш һуҡҡан.

**1.** Научись отвечать на вопрос «Сәғәт нисә?» («Который час?»).



сәғәт бер



сәғәт беренсе ярты



ун биш минуттан бер



ун биш минут беренсе

Т **2.** Найдите в газете программу телепередач и составьте свою программу любимых передач. Обсудите в группе все программы.

**П** **3.** Крош хотел за день всё успеть, и, чтобы чего-нибудь не забыть, он завёл будильник. Помогите Крошу разобраться с часами.




**ярты** — половина

**башҡа ҡояш һуғыу** (фразеол.), **көн тейеү** — солнечный удар

## 61 Нимә менән?
## На чём?

А Мин каникулда сәғәт унда йоҡонан торам. Ун икенсе яртыла мин инде тышта велосипедта йөрөйөм, һыу инәм. Сәғәт ун биш минут икенселә төшкө аш ашайым. Сәғәт икенән дүрткә тиклем кино ҡарайым йәки компьютерҙа уйнайым. Кис, сәғәт алтыла, малайҙар менән уйнарға сығабыҙ. Сәғәт һигеҙенсе яртыла атайым менән әсәйем эштән ҡайталар. Киске аш ашайбыҙ. Шулай итеп көн үтеп тә китә.

**1.** Познакомься с новыми словами.



**п** **2.** Прочитайте и продолжите диалог.

— Мин иртәгә Төркиәгә китәм.
— Нимә менән барaһың?
— Атайым машина менән аэропортҡа алып бара. Унан самолёт менән осабыҙ.
— Поезд менән Төркиәгә барып буламы икән?
— ...

1. Расскажи о своих путешествиях.
2. Поговорите о правилах поведения на транспорте.

**3.** Прочитай стихотворение о столице. Не забывай про правильное произношение звуков и ударения.

### Баш ҡала шундай матур



Кани́кулда баш ҡалаға́
Сәйәхәткә́ килде́к беҙ,
Өфө́ буйла́п автóбуста
Урамдарҙа́ елде́к беҙ.

Дуҫлы́ҡ монументы́ бейе́к —
Ҡара́п торҙо́ҡ яҡында́н.
Һөйлә́й беҙгә́ башҡо́рт, русты́ң
Ҙур дуҫлығы́ хаҡында́.

(Факиһа Туғыҙбаева)

**4.** Выпиши в два столбика («Возьму с собой в путешествие» и «Оставлю дома») слова: ҡәләм, салбар, тун, туп, өҫтәл, итек, өй, һыйыр, китап, бейәләй, велосипед, ҡоймаҡ, уйынсыҡ, икмәк, тәрилкә, дәреслек, сынаяҡ, эт, кроссовки, бысаҡ, шорты, ултырғыс, сәнске, таҡта,

hөт, альбом, нетбук, кәзә, телефон, компас, рюкзак, фонарь...

Дополни таблицу своими примерами.

| Үҙем менән сәйәхәткә алам | Өйҙә ҡалдырам |
|---|---|
| Кроссовки... | Тун... |

**көн** — день

**үтеп китә** — проходит
**сәйәхәт** — путешествие
**ҡунаҡҡа** — в гости

## 62 Нимә эшләйбеҙ? Что мы делаем?

А Беҙ класс менән Мәскәүгә сәйәхәткә барабыҙ. Иртән сәғәт етелә мәктәп алдында йыйылабыҙ. Кәрим ағай автобус менән аэропортҡа алып бара. Сәғәт туғыҙҙа самолёт. Мәскәүҙә биш көн булабыҙ. Аҙаҡ поезд менән Өфөгә ҡайтабыҙ.

**1.** Познакомься с новыми словами.



hыу инәбеҙ



ҡояшта ҡыҙынабыҙ



еләк, бәшмәк йыябыҙ



балыҡ тотабыҙ

**2.** Шарик и кот Матроскин в письме к дяде Фёдору всё перепутали. Исправь ошибки.

Һау бул, Фёдор бабай! Ауылда бик рәхәт! Без Шарик менән  тотабыҙ,  йыябыҙ. Шуға күрә ҡояшта ҡыҙынабыҙ, һыу инәбеҙ. Көндәр бик эҫе.

Һаумы, Фёдор бабай!

П **3.** Прочитайте диалог и составьте свой по образцу.

— Алло, әсәй, сәләм!
— Һаумы, ҡыҙым. Ауылда нисек?
— Ауылда рәхәт. Көндәр эҫе.
— Нимә эшләйһегеҙ?
— Ҡыҙҙар менән һыу инәбеҙ, ҡояшта ҡыҙынабыҙ.
— Өләсәйеңә ярҙам ит, ҡыҙым.
— Ярҙам итәм. Өләсәйем менән еләк йыябыҙ. Баҡсаға һыу һибәм.
— Афарин, ҡыҙым!

**эҫе** — жарко
**баҡса** — сад, огород
**еләк** — ягода
**бәшмәк** — гриб

**йыйылабыҙ** — собираемся
**шуға күрә** — поэтому
**һыу һибәм** — поливаю
**афарин** — молодец

## 63 Нимә эшләйбеҙ?
## Что мы делаем?

А Ике малай бәхәсләшә:

— Каникулда ауылда рәхәт!

— Юҡ, лагерҙа!

— Ауылда һыу инәбеҙ, ҡояшта ҡыҙынабыҙ.

— Лагерҙа ла.

— Ауылда малайҙар менән уйнайбыҙ!

— Лагерҙа ла.

— Ауылда еләк йыябыҙ, балыҡ тотабыҙ.

— Лагерҙа ла.

— Өләсәйем иртән ҡоймаҡ йәки бәлеш бешерә.

— ...

Запомни!

| в корне слова | окончание | примеры |
|---|---|---|
| гласные<br>о, ы, а, у, я | -быҙ | йыябыҙ<br>уйнайбыҙ<br>ашайбыҙ |
| гласные<br>ө, ү, ә, и, е, э | -беҙ | китәбеҙ<br>инәбеҙ<br>йүгерәбеҙ |

**1.** Рассмотри внимательно распорядок дня в лагере. Составь текст по рисункам. Расскажи о вашем распорядке в лагере.




Өлгө: Лагерҙа сәғәт һигеҙҙә торабыҙ. Сәғәт биштә Нептун байрамын үткәрәбеҙ.

**2.** Выразительно прочитай стихотворение. Оцени своё чтение.

## Лагерға

Уҡыуҙар бөttө,
Йәмле йәй етте.
Урман, тау, күлдәр
Беҙҙе бик көттө.

Һау бул һин, мәктәп,
Һау бул хәҙергә!
Ял итергә беҙ
Киттек лагерға.

(Шәриф Бикҡол)

### Правила поведения на воде

Нельзя купаться в незнакомых местах. Врачи советуют купаться 20 минут, потом сделать небольшой перерыв. После длительного пребывания на солнце нельзя сразу прыгать в воду.

А знаете ли вы, как вести себя на водоёмах?

**йәй** — лето

**бәхәсләшәләр** — спорят
**үткәрәбеҙ** — проводим
**йәмле** — красивый (-ая, -ое)

# 64 Кабатлау
# Повторение





## Ҡәҙерле балалар!

Башҡорт теле төрки телдәре төркөмөнә ҡарай. Донъяла 100 миллиондан ашыу кеше был телдәрҙә һөйләшә.

Шиғырҙы уҡып, уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Дорогие ребята!

Башкирский язык относится к тюркскому семейству языков. В мире более 100 миллионов человек разговаривают на этих языках.

Прочитав стихотворение, вы узнаете, какие языки являются родственными башкирскому языку.

### Телдәр илендә Телдәр

Телдәр — бик тә зирәк малай
Ярата туған телен,
Телдәр иленә барған ул
Алырға аҡыл, белем.

Ҙур Телдәр илендә Телдәр,
Балалар күплегенә
Аптыраған,
Сәләм биргән:
«Һаумы!» — тип ипле генә.

Татар менән Үзбәк уны
Ҡосаҡлаған: «Туған» — тип,

Ҡырғыҙ менән Ҡарағалпаҡ
Яратҡан, ти: «Уңған!» — тип.

Әҙербайжан, Төрөкмән дә:
«Хуш килдең, Телдәр!» — тигән,—
Ҡарасай менән Балҡар ҙа
Сәләмләп башын эйгән.

Сыуаш хатта бейеп киткән,
Ҡумыҙ уйнаған Яҡут,
Өҙләгән Тыва, Алтай ҙа:
«Ҡәҙерле һин, — тип, — Башҡорт!»

Телдәрҙең ҡурай моңона
Йырлаған Төрөк, Уйғыр,
Нуғай менән Ҡараим да.
Оҙон булған, ти, был йыр.

Ҡумыҡ, Хакас сәсәнлектә
Ярышҡан кемуҙарҙан.
Ғағауыз менән Долған да
Ҡалышмаған уларҙан.

Ҡаҙаҡ ҡуш ҡуллап күрешеп,
Тотторған саптар атын:
«Һабантуйҙа елдерерһең,
Данлы бит, башҡорт, затың».

Танышып, бүләк бирешеп
Бөткәс ҡәрҙәш-туғандар,
Төрки телдәрҙең тарихын
Уҡырға ултырғандар.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

## Һанап ҡара әле

Бында тора бесәйҙәр,
Һана нисә бесәй бар:
Береһе уның һөт эсә,
Береһе тәҙрә төбөндә,
Береһе шкаф янында
Сысҡан сыҡҡанын көтә.
Өсәүһе йомғаҡ булып,
Йоҡлап ята төш күреп.

Әхмәттең бер алмаһы,
Әсғәттең бер алмаһы,
Бер алма бар Әсмәлә,
Бер алма бар Сафала,
Берәү өҫтәлдә ята.
Ә бөтәһе нисә алма?

(Ғариф Ғүмәр)

## Компьютер

Компьютерҙа уйнайым,
Уйнап-уйнап туймайым.
Дүрт булды ике күҙем,
Дүртәүгә әле түҙҙем.

Уйнап-уйнап туймағас,
Ваҡытты ла тоймағас,
Алты булды бит күҙем,
Алтыға әле түҙҙем.

Эй компьютер, компьютер,
Минән китсе, ары тор,
Арыным мин, арыным,
Ниндәй хәлгә тарыным?

«Уйын етте!» — Аңламайым,
Айырыла алмайым,
Ун булды ике күҙем,
Унға ла әле түҙҙем.

Түҙҙем дә ул, ҡоланым,
Ҡоланым да иланым,
Ауырта шул ун күҙем,
Ҡайҙан алайым түҙем?!

Ә компьютер туҡтамай,
Туҡтарға ла уйламай,
Тиле телепузиктар
Көлә минән: «Уй, малай,
Уйнай белмәйһең уйын,
Уйын түгел дә ҡыйын!»
Йә биш, йә өс күҙҙәре,
Һаман көлә үҙҙәре,
Минән көлә үҙҙәре.

(Фәкиһа Туғыҙбаева)

## Олатайым ордены

Бөйөк еңеү көнөндә гел
Орден таға олатай.
— Орденыңды бир, олатай,
Мин саҡ ҡына уйнатам, —
Тигәйнем дә, күрһөндө ул:
— Орден — был, түгел тәтәй.
Тыңла, улым, һөйләгәнде,
Һин — ҙур, түгел бәләкәй.
Ат атланып, яуға саптым
Фашистар баҫҡас илде,
Улар шундай көслө ине,
Улар шундай күп ине.
Фашистарҙың танкыларын
Шартлаттым, һаны ла юҡ,
Үҙем ҡаты яраландым,
Аҡҡан, ти, ҡаным да нығ.
Был орденды шуның өсөн
Бирҙеләр миңә, балам.
Еңеү көнөндә уйланып,
Ҡулыма уны алам…
Бөгөн — бөйөк Еңеү көнө,
Байрам бөгөн, ҙур байрам.
Олатайым менән бергә
Мин дә байрамға барам.

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)

## Балалар уйыны

### Йөҙөк һалыш

Балалар теҙелешеп ултыра. Берәү «йөҙөк һалыусы» була. Ул малай-ҡыҙҙарҙың ҡулдарына йөҙөк һала. Йөҙөк һалыусы: «Кемдә йөҙөк, һикереп сыҡ», — ти. Йөҙөклө кеше һикереп торғанда, күршеләре (соседи) уны тоторға тейеш. Тотһалар, ул кешегә яза (наказание) бирелә: йырларға, бейергә, шиғыр һөйләргә, әтәс булып ҡысҡырырға.

Прочитай, заменяя рисунки словами.

## Ғаилә байрамдары. Семейные праздники

### Тыуған көн. День рождения

Асияның тыуған көнө. Әсәһе ҡыҙына  бүләк итте. Атаһы  алған. Өләсәһе  бәйләгән. Олатаһының бүләге — . Ҡартатаһы  алған. Ҡартәсәһе һүрәт төшөрөргә  бүләк итте.

Һый күп ине.  ашанылар,  бик тәмле ине. Аҙаҡтан  менән  эстеләр.

Өҫтәл артынан торғас, Асия  кейеп ҡараны.  таман. Олатаһы менән  уҡынылар, ҡартатаһы, ҡартәсәһе менән  төшөрҙөләр.

Атаһы  бергә ултыртып, фотоға төшөрҙө. Тыуған көн бик күңелле булды.

(Факиһа Туғыҙбаева)

## Дүрт ҡыҙыҡай

Дүрт ҡыҙыҡай менән әсәй килә.

— Үҙемә ҙур сумка алам, — ти әсә.

— Тағы ла дүрт бәләкәй сумка, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Ҙур тараҡ (расчёска) һатып алам, — ти әсә.

— Беҙгә лә дүрт бәләкәй тараҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Ҙур яулыҡ (платок) һатып алам, — ти әсә.

— Тағы ла дүрт бәләкәй яулыҡ, — ти дүрт ҡыҙыҡай.

— Тағы ла иҙән йыуырға щётка алам, — ти әсә.

Дүрт ҡыҙыҡай бер һүҙ ҙә өндәшмәй.

(Д. Лукичтан)

## Дарыу

Бер ҡыҙҙың әсәһе ауырып китә. Врач ауырыуға бик әсе дарыу бирә. Ҡыҙыҡай әсәһенең дарыуҙы ҡыйынлыҡ менән эскәнен күрә лә:

— Ҡәҙерле әсәкәйем, ҡана, был әсе дарыуҙы һинең өсөн үҙем эсәйем, — ти.

(К. Ушинскийҙан)

# Башҡортса-русса һүҙлек / Башкирско-русский словарь

## А

**ағай** — брат
**ағас** — дерево
**Айҙа** — на Луне
**айыу** — медведь
**аҡ** — белый (-ая, -ое)
**аҡҡош** — лебедь
**алты** — шесть
**алтын ҡул** — золотые руки
**алтынсы** — шестой
**алыусы** — покупатель
**апай** — сестра
**арҡа** — спина
**арыҫлан** — лев
**аҫтында** — под (*предлог*)
**асыуланып** — сердито
**ат** — лошадь
**атай** — папа
**ауыҙ** — рот
**ауыл** — деревня
**ауылда** — в деревне
**ауырта** — болит
**ауыртмай** — не болит
**афарин** — молодец
**аш** — суп
**ашай** — ест
**ашайым** — ем, кушаю
**ашарға эҙләй** — ищет еду
**ашхана** — столовая
**аяҡ** — нога

## Б

**байрам** — праздник
**баҡса** — сад, огород
**бал** — мёд
**балалар** — дети
**балалар баҡсаһы** — детский сад
**балғалаҡ** — чайная ложка
**балыҡ** — рыба
**балыҡ тотабыҙ** — ловим рыбу
**бар** — есть
**бармаҡ** — палец
**бармы?** — есть ли?
**батыр** — смелый (-ая, -ое)
**баҫтырҙы** — погнался
**баш** — голова
**башҡа ҡояш һуғыу** (*фразеол.*), көн тейеү — солнечный удар
**беҙ** — мы
**беҙҙең** — наш
**бейек** — высоко
**бейеү** — танец
**бейәләй** — варежки
**белем** — знания
**бер** — один
**беренсе** — первый
**бесәй** — кот, кошка
**бесәй балаһы** — котёнок

бесә́н — се́но
бешерҙе́ — пригото́вила
биҙә́йбеҙ — украша́ем
билдә́ — оце́нка
бит — лицо́
бите́н йыуа́ — умыва́ется
биш — пять
бишенсе́ — пя́тый
боҙ — лёд
бөгө́н — сего́дня
бөркө́т — орёл
бутҡа́ — ка́ша
бүлә́к — пода́рок
бүре́ — волк
бүре́к — ша́пка
быҙа́у — телёнок
быйма́ — ва́ленки
был ни́мә? — что э́то?
быса́ҡ — нож
бысратма́ — не па́чкай
бәле́ш — пиро́г
бәләкә́й — ма́ленький (-ая, -ое)
бәләкәстә́р — малыши́
бәхетле́ — счастли́вый (-ая, -ое)
бәхәсләшәлә́р — спо́рят
бәшмә́к — грибы́

## В

ватма́ — не лома́й
врач булы́п — врачо́м

## Г

генә́ — то́лько

## Ғ

ғаилә́ — семья́
ғәжә́п — удиви́тельный (-ая, -ое)
ғәфү́ ит — извини́

## Д

дары́у — лека́рство
дошма́н — враг
дөйә́ — верблю́д
дөрө́ҫ — пра́вильно
дуҫ — друг
дуҫта́р — друзья́
дүрт — четы́ре
дүртенсе́ — четвёртый
дәре́с башланды́ (бөттө́) — уро́к начался́ (зако́нчился)
дәре́с әҙерлә́й — де́лает уро́ки
дәресле́к — уче́бник
дәреслектә́н уҡы — чита́й по уче́бнику
дәфтә́р — тетра́дь
дәфтәргә́ яҙа́быҙ — пи́шем в тетра́ди

## Ҙ

ҙур — большо́й (-ая, -ое)

## Е

ейә́н — внук
ейәнсә́р — вну́чка
елә́к — я́года

**ем** — корм
**ерҙә́** — на земле́
**ете́** — семь
**етенсе́** — седьмо́й

## З

**зәңгә́р** — голубо́й (-ая, -ое)

## И

**ике́** — два
**икенсе́** — второ́й
**икмә́к** — хлеб
**инергә́ мөмки́нме** (яра́ймы)? — мо́жно войти́?
**ире́н** — губа́
**иртәгә́** — за́втра
**иртә́** — у́тро
**иртәнсә́к** — у́тром
**иртәнге́ аш** — за́втрак
**иҫке́** — ста́рый (-ая, -ое)
**ит** — мя́со
**ите́к** — сапоги́
**иш** — па́ра
**ишетмә́йем** — не слы́шу

## Й

**йоҡла́й** — спит
**йомортҡа́** — яйцо́
**йомша́ҡ** — мя́гкий (-ая, -ое)
**йондо́ҙ** — звезда́
**йортта́** — в до́ме
**йөҙә́** — пла́вает
**йөк** — воз
**йөнтә́ҫ** — мохна́тый (-ая, -ое)
**йүнәтә́** — ремонти́рует
**йығылды́м** — упа́л
**йыйыла́быҙ** — собира́емся
**йыйып ҡуйма́й** — не убира́ет
**йыр** — пе́сня
**йыя́быҙ** — собира́ем
**йәй** — ле́то
**йәйге́** — ле́тний (-яя, -ее)
**йәмле́** — краси́вый (-ая, -ое)
**йәше́л** — зелёный (-ая,-ое)
**йәшенә́** — пря́чется
**йәшә́йем** — живу́
**йәшәмә́йем** — не живу́

## К

**карауа́т** — крова́ть
**карту́ф** — карто́шка
**кейә́м** — наде́ну, надева́ю
**креймә́йем** — не наде́ну
**ке́мдеке?** — чей? чья? чьё?
**керпе́к** — ресни́ца
**кеҫә́** — карма́н
**кибе́т** — магази́н
**килделә́р** — пришли́
**кис** — ве́чер
**кис көнө́** — ве́чером
**кисә́** — вчера́
**китапты́ а́сығыҙ** — откро́йте кни́гу

**китапты́ я́бығыҙ** — закро́йте кни́гу
**класс ни́ндәй?** — класс како́й?
**көн** — день
**көслө́** — си́льный (-ая, -ое)
**көсө́к** — щено́к
**күгәрсе́н** — го́лубь
**күҙ** — глаз
**күҙ һалы́у** — глаз положи́ть
**күҙәте́п ултыра́м** — наблюда́ю
**күк** — не́бо
**күңелле́** — ве́село
**күп** — мно́го
**күркә́** — индю́к
**күркә́ себеше́** — индюшо́нок
**кәҙә́** — коза́
**кәҙә́ бәрәсе́** — козлёнок
**кәкү́к** — куку́шка
**кәрә́к** — на́до
**кәрәкмә́й** — не на́до

## Ҡ

**ҡабатла́й** — повторя́ет
**ҡаҙ** — гусь
**ҡаҙ бәпкәһе́** — гусёнок
**ҡаҙы́** — дома́шняя колбаса́
**ҡа́йҙа?** — где?
**ҡа́йҙан?** — отку́да?
**ҡала́ҡ** — ло́жка
**ҡалала́** — в го́роде
**ҡана́т** — крыло́
**ҡар** — снег
**ҡар баба́й** — снегови́к
**ҡара́** — чёрный (-ая, -ое)
**ҡара́й** — смо́трит, уха́живает
**ҡарға́** — воро́на
**ҡарлуға́с** — ла́сточка
**Ҡарһылы́у** — Снегу́рочка
**ҡаршыла́й** — встреча́ет
**ҡаса́** — убега́ет
**ҡа́сан?** — когда́?
**ҡаш** — бровь
**ҡойма́ҡ** — блин
**ҡойро́ҡ** — хвост
**ҡола́ҡ** — у́хо
**ҡоло́н** — жеребёнок
**ҡоро́т** — куру́т
**ҡорт** — червь
**ҡоя́ш** — со́лнце
**ҡул** — рука́
**ҡул эше́** — рукоде́лие
**ҡунаҡҡа́** — в го́сти
**ҡура́й** — кура́й
**ҡурҡа́ҡ** — трусли́вый (-ая, -ое)
**ҡурҡма́** — не бо́йся
**ҡурса́ҡ** — ку́кла
**ҡусты́** — брати́шка
**ҡуя́н** — за́яц
**ҡыҙы́л** — кра́сный (-ая, -ое)
**ҡыҙы́ҡ** — интере́сно, смешно́
**ҡыҙына́быҙ** — загора́ем

**ҡымы́ҙ** — кумы́с
**ҡысҡырға́н** — кри́кнул
**ҡысҡыры́п** — гро́мко
**Ҡыш баба́й** — Дед Моро́з
**ҡәлә́м** — каранда́ш

## М

**май** — ма́сло
**маймы́л** — обезья́на
**маңла́й** — лоб
**мату́р** — краси́вый (-ая, -ое)
**менә́н** — с *(предлог)*
**мин** — я
**мин ауылда́** — я в дере́вне
**мин ни́мә ярата́м?** — что я люблю́?
**мин экску́рсияла** — я на экску́рсии
**мине́ң кескә́й дуҫтары́м** — мои́ ма́ленькие друзья́
**мине́ң исеме́м** — моё и́мя
**мине́ң мәктәбе́м** — моя́ шко́ла
**миң** — ро́динка
**моро́н** — мо́рда
**мырылда́й** — мурлы́чет
**мышы́** — лось
**мәктә́п** — шко́ла
**мәктә́п ни́ндәй?** — шко́ла кака́я?

## Н

**наса́р** — плохо́й (-ая, -ое)
**ни́мә булды́?** — что случи́лось?
**ни́мәгә?** — кому́? чему́?
**ни́мә менә́н?** — чем? с чем?
**ни́мә эшлә́й?** — что де́лает?
**ни́мә эшлә́йем?** — что де́лаю?
**ни́ндәй?** — како́й?
**ни́сек?** — как?
**ни эшлә́п?** — почему́?
**ныҡ баҫма́ғыҙ** — не то́пайте

## О

**ойоҡба́ш** — носки́
**олата́й, картата́й** — де́душка
**оса́** — лета́ет
**осо́п киткә́н** — улете́л
**осрашы́рбыҙ** — встре́тимся
**оя́** — гнездо́

## Ө

**өйгә́ эш** — дома́шняя рабо́та
**өйрә́к** — у́тка
**өйрә́к бәпкәһе́** — утёнок

**өләсә́й, ҡартәсә́й** — ба́бушка
**өрә́** — ла́ет
**өс** — три
**өс ҡатлы́** — трёхэта́жный
**өсөнсө́** — тре́тий
**өҫтөндә́** — на *(предлог)*
**Өфө́** — Уфа́

### Р

**рәхмә́т** — спаси́бо
**рәхә́т** — хорошо́

### С

**салба́р** — брю́ки
**сана́** — са́ни
**саңғы́** — лы́жи
**саф** — све́жий (-ая, -ее)
**суҡы́ш** — клюв
**суска́** — свинья́
**суска́ балаһы́** — поросёнок
**сыға́** — выхо́дит
**сығырға́ яра́ймы?** — мо́жно вы́йти?
**сыйырсы́ҡ** — скворе́ц
**сыная́ҡ** — ча́шка
**сәй** — чай
**сәйәхә́т** — путеше́ствие
**сәксә́к** — чак-чак
**сәлә́м** — приве́т
**сәнске́** — ви́лка
**сәс** — во́лосы
**сәтләүе́к** — оре́х
**сәхнә́** — сце́на

### Т

**таба́** — сковорода́
**таҙа́** — чи́стый (-ая, -ое)
**таҡтаға́ сыҡ** — вы́йди к доске́
**тамамлана́** — зака́нчивается
**тапта́р** — пя́тна
**тарата́** — раздаёт
**таты́у** — дру́жно
**тау** — гора́
**тауҙа́** — на горе́
**тау хужаһы́** — хозя́ин горы́
**тауы́ҡ** — ку́рица
**тауы́ҡ себеше́** — цыплёнок
**ташла́ма** — не броса́й
**тейе́н** — бе́лка
**тейҙе́ңме?** — тро́гала?
**тел** — язы́к
**тел йото́у** — язы́к проглоти́ть
**тел сарла́у** — ля́сы точи́ть
**телә́** — ре́жет
**терпе́** — ёж
**теш** — зуб
**тиҙҙә́н** — ско́ро
**тик** — то́лько
**тоҡо́м** — поро́да
**торна́** — жура́вль
**тотҡа́н** — пойма́ла

**төҙө́й** — стро́ит
**төлкө́** — лиса́
**төш** — по́лдень
**төшкө́ аш** — обе́д
**туға́н** — ро́дственник
**туғы́ҙ** — де́вять
**туғыҙынсы́** — девя́тый
**туҙҙы́рма** — не разбра́сывай
**туҡтаны́** — останови́лся
**тумыртҡа́** — дя́тел
**тун** — шу́ба
**туңдырма́** — моро́женое
**туп** — мяч
**турға́й** — воробе́й
**тутыйғо́ш** — попуга́й
**тү́гел** — не *(частица)*
**түңәрә́к** — кружо́к
**тыуға́н көн** — день рожде́ния
**тышта́** — на у́лице
**тәмле́** — вку́сно
**тәнәфе́с** — переме́на
**тәпә́й** — ла́пы
**тәрбиәлә́й** — уха́живает

## У

**уйна́й** — игра́ет
**уҡы́й** — у́чится, чита́ет
**уҡы́йым** — учу́сь
**уҡыта́** — у́чит
**уҡытыусы́** — учи́тель
**уҡыусыла́р** — учени́ки
**ул** — он (она́)
**ун** — де́сять
**унынсы́** — деся́тый
**уны́ң исеме́** — его́ (её) и́мя
**уң** — пра́вая (-ый, -ое)
**урамда́ йөрө́й** — гуля́ет на у́лице
**урамында́** — на у́лице
**уҫа́л** — злой
**уты́ҙ биш** — три́дцать пять

## Ү

**үге́ҙ** — бык
**үпкәләштелә́р** — оби́делись друг на дру́га
**үркә́с** — горб
**үсеклә́й** — дра́знит
**үте́п китә́** — прохо́дит
**үткәрә́без** — прово́дим

## Ф

**фатирҙа́** — в кварти́ре
**фил** — слон
**фән** — нау́ка, предме́т

## Х

**хәйләкә́р** — хи́трый

## Һ

**һайра́й** — поёт
**һайыҫҡа́н** — соро́ка

**һаҡ йөрө́** — ходи́ осторо́жно
**һаҡла́й** — охраня́ет
**һалбы́р ҡолаҡлы́** — лопоу́хий (-ая, -ое)
**һандуға́с** — солове́й
**һары́ҡ** — овца́
**һары́ҡ бәрәсе́** — ягнёнок
**һатыусы́** — продаве́ц
**һаты́п алды́** — купи́л
**һау бул** — до свида́ния
**һау булығы́ҙ** — до свида́ния
**һа́умы** — здра́вствуй
**һа́умыһығыҙ** — здра́вствуйте
**һеҙ кем?** — вы кто?
**һеңле́** — сестрёнка
**һиге́ҙ** — во́семь
**һигеҙенсе́** — восьмо́й
**һикерә́** — прыгает
**һин** — ты
**һин ҡа́йҙа йәшә́йһең?** — ты где живёшь?
**һин кем?** — ты кто?
**һине́ң исеме́ң** — твоё и́мя
**һине́ң исеме́ң ни́сек?** — как тебя́ зову́т?
**һиңә ни́сә йәш?** — ско́лько тебе́ лет?
**һөйә́к** — кость
**һөйлә́й** — расска́зывает
**һөйлә́йбеҙ** — расска́зываем
**һөйләште́к** — договори́лись
**һөртә́** — вытира́ет
**һөт** — молоко́
**һуғы́п ала** — посту́кивает
**һут** — сок
**һүрә́т төшөрә́** — рису́ет
**һыйы́р** — коро́ва
**һыу** — вода́
**һыуҙа́** — в воде́
**һыу инә́беҙ** — купа́емся
**һыу һибә́м** — полива́ю
**һыуы́ҡ** — хо́лодно

## Ш

**шаула́мағыҙ** — не шуми́те
**шаяра́** — игра́ет, шу́тит
**шиғы́р** — стихотворе́ние
**шишмә́** — исто́чник
**шөғөлләнә́м** — занима́юсь
**шуға́ күрә́** — поэ́тому
**шыршы́** — ёлка
**шыуа́быҙ** — ката́емся

## Э

**эйе́** — да
**элә́беҙ** — ве́шаем
**энәле́** — колю́чий (-ая, -ее)
**эремсе́к** — творо́г
**эсендә́** — в *(предлог)*, внутри́
**эсә́м** — пью
**эҫе́** — жа́рко

**эт** — соба́ка
**эшлә́й** — рабо́тает

## ә

**әҙерлә́йбеҙ** — гото́вим
**әҙерләнә́** — гото́вится
**әллә́** — не зна́ю
**әсә́й** — ма́ма

## ю

**юйғы́с** — ла́стик
**юҡ** — нет
**ю́ҡтыр** — нет, наве́рное
**юлбары́ҫ** — тигр
**юры́й ғына́** — понаро́шку

## я

**яҙ** — весна́
**яҙа́** — пи́шет
**яҡшы́** — хорошо́
**ял итә́** — отдыха́ет
**ялбы́р йөнлө́**
длинношёрстный (-ая, -ое)
**янында́, эргәһендә́** —
ря́дом, во́зле, о́коло
**яңы́** — но́вый
**яңылышты́ң** — оши́бся
**яр** — бе́рег
**ярҙа́м итә́** — помога́ет
**ярты́** — полови́на
**ята́** — лежи́т

## Йөкмәткеһе / Содержание


Танышыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Был мин. . . . . . . . . . . . . . . . . . . .15
Минең ғаиләм. . . . . . . . . . . . . . 20
Мин нимә яратам?. . . . . . . . . . 30
Минең мәктәбем . . . . . . . . . . . 39
Минең класым . . . . . . . . . . . . 42
Мин мәктәпкә йыйынам . . . . 44
Мин уҡыусы . . . . . . . . . . . . . . 47
Мин дәрестә. . . . . . . . . . . . . . 50
Мин дәрестән сыҡтым . . . . . .53
Минең уйынсыҡтарым. . . . . . .61
Мин уйнарға яратам . . . . . . . .71
Мин уйнарға сығам . . . . . . . . 76
Мин уйнарға сыҡтым . . . . . . 80
Минең кескәй дуҫтарым. . . . 83
Мин ял итәм. . . . . . . . . . . . . . . .91
Уҡыу өсөн материал. . . . . . .130
Башҡортса-русса һүҙлек . . . . 137

Знакомство . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Это я . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .15
Моя семья. . . . . . . . . . . . . . . . . 20
Что я люблю?. . . . . . . . . . . . . . 30
Моя школа . . . . . . . . . . . . . . . . 39
Мой класс . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
Я собираюсь в школу . . . . . . 44
Я ученик . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Я на уроке . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Я вышел с уроков. . . . . . . . . . .53
Мои игрушки . . . . . . . . . . . . . . .61
Я люблю играть. . . . . . . . . . . . .71
Я выхожу играть . . . . . . . . . . . 76
Я вышел играть . . . . . . . . . . . . 80
Мои маленькие друзья . . . . . 83
Я отдыхаю . . . . . . . . . . . . . . . . .91
Материалы для чтения . . . . .130
Башкирско-русский словарь . . 137

Учебное пособие

**Тулумбаев** Хасан Абдуллович
**Давлетшина** Мархаба Саяфаровна
**Гиниятуллина** Файруза Миассаровна
**Кинзябаева** Нафиса Наилевна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 2 класса для изучения башкирского языка (как государственного) в общеобразовательных организациях с русским языком обучения**

(на башкирском и русском языках)

Уҡыу баҫмаһы

**Толомбаев** Хәсән Абдулла улы
**Дәүләтшина** Мәрхәбә Сәйәфәр ҡыҙы
**Ғиниәтуллина** Фәйрүзә Миәссәр ҡыҙы
**Кинйәбаева** Нәфисә Наил ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 2-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире Ә. А. Баһаманова
Рәссамы Г. Е. Голубев
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары Ю. Р. Хәбибуллина, А. Р. Баййегетова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.10.2017. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. JournalSans гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 10,82+0,29 форз. Шартлы буяу отт. 45,03.
Иҫәп-нәшер таб. 5,95+0,525 форз. Тиражы 40610 дана. Заказ 1.0197.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.